ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 декабрь (аҡъюлай) 2020
№51 (937)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамлана. Рәхмәт һүҙебеҙҙе еткерәбеҙ 2021 йылда ла "Киске Өфө" гәзитенең дуҫы, уҡыусыһы булып ҡаласаҡ милләттәштәребеҙгә. Кемдәр гәзитебеҙгә ваҡытында яҙылырға өлгөрмәгән, быны 17 ғинуарға тиклем атҡарып, "Киске Өфө"нө февралдән алдыра башлай ала. Рух, фекер, бай мәғлүмәт сығанағы булған баҫма менән бергә булыуығыҙҙы теләйбеҙ.**

***Мөхәрририәт.***


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Малынды ҡарасәлә,** юл ситендә йөрөмәһен! 6



**Ырыуыбыҙ - Танып,** сығышыбыҙ - Ҡара-табын 7



**Һайлап алған яҙмышым** 8-9



**Кешелектең...** иң боронғо юлдашы ул таштар 11-12



**ТВ-программа** 14


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Вахта ысулы менән ситтә эшләүселәр һаны буйынса Башҡортостан, әлеккесә, алдынғы урындарҙы биләй. Төрлө сығанаҡтарҙан 160 меңгә яҡын кеше Себер тарафтарында, шулай уҡ Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек һәм башҡа ҙур ҡалаларҙа эшләй. Ни өсөн һеҙ ситтә эшләүҙе хуп күрәһегеҙ?***

***Альберт ҒИМАЛЕТДИНОВ, Күгәрсен районы:*** Мин - юғары белемле ауыл хужалығы белгесе. Атай-әсәйем ғүмер буйы ауылда йәшәне, зоотехник, ветврач булып эшләне, мине лә ерҙе, иген үҫтереү эшен яратһын, тип тәрбиәләргә тырыштылар. Стәрлетамаҡ ауыл хужалығы техникумын тамамлағас, Башҡорт дәүләт аграр университетына уҡырға инеүемде ҙур шатлыҡ менән ҡабул иттеләр, сөнки юғары белемле ауыл хужалығы белгесе булыу - уларҙың тормошҡа ашмаған ғүмерлек хыялы ине. Ул ваҡытҡа ауылдарҙа колхоз-совхоздар тарҡалып өлгөргәйне, шуға күрә крәҫтиән-фермер хужалығы ойоштороуҙан башҡа әмәл ҡалмағайны. Атай ҡуш ҡуллап ярҙам итергә тотондо. Ҡайҙандыр иҫке трактор һатып алып ремонтлап бирҙе. Уларҙың пайынан тыш, ҡуртымға бер аҙ ер алып, эш башлап ебәрҙек. Миңә күберәген ҡағыҙҙар менән эшләргә тура килде, атай-әсәй, ҡустым иген үҫтерҙе, ишле малды ҡараны.

Донъя шулай һәүетемсә генә барғанда, күрше ауылдан бер матурҡайға күҙ төштө, бергә тормош ҡорорға булдыҡ. Матур туй ҙа үтеп китте, кәләш көндән-көн айырым йәшәү тураһында һүҙ ҡуҙғата башланы.

Ә минең орлоҡ, яғыулыҡ-майлау материалдарына алған кредиттан башҡа бер нәмәм дә юҡ. Баш вата торғас, күрше ағайға эйәреп, Ямал утрауына юл тоттом. Унда мине, әлбиттә, бер кем дә көтөп тормай ине. Бер ни тиклем ыҙаланып йөрөй торғас, оператор булып эшкә урынлаштым. Бында минең юғары белемле булыуым бер кемгә лә кәрәкмәй булып сыҡты.

Өс ай эшләйем дә, ялға ҡайтам. Өлкәндәрҙең юл ғазабы - гүр ғазабы тигәнен бына шунда аңланым да инде. Тиҙҙән балабыҙ тыуҙы, атай булыу шатлығын ситтән тороп ҡына кисерҙем. Вахтаға барып ҡайтыуыма улым оноп тора, тәүге көндәрҙә сит итеп ҡарай, шунан өйрәнеп китә, ә миңә эшкә китергә ваҡыт та етә. Әсәйем ауылдаштарға зарлана, улың унда аҡсаны көрәп ала, үтескә биреп тор әле, тип йөҙәтәләр икән. Ә миңә йорт төҙөргә кәрәк... Кәләш, район үҙәгенән алыҫ торабыҙ, ауырыпфәлән китһәк, ни эшләрбеҙ, тип һөйләнгәнгә ҡаланан фатир һатып алдым. Хәҙер улым балалар баҡсаһына йөрөй, ҡатын да үҙ һөнәре буйынса эш тапты. Бынан һуң ауылға йәшәргә ҡайтырмы икән? Бик икеле. Ә мин үҙем бер ҡасан да ауылдан китергә уйламай инем. Йорт һалып, күп итеп мал-тыуар тотоп, йылҡы аҫрап, иген үҫтереп, үҙ еремдә хужа булып йәшәгем килә.

Яҙғыһын вахтанан ҡайтҡанда ике аҙна Красноусол шифаханаһында тоттолар, ғаилә янына ашҡынып ҡайтып килеүемде шулай тотҡарланылар. Әле лә ялымды ҡыҫҡартырға тура килә, сөнки вахтаға китергә тағы ике аҙнаға алдан килергә ҡуштылар, моғайын, тағы обсерватор үтергә тура килер.

Дәүләт халыҡ һанын арттырыу, демографияны яҡшыртыу өсөн Әсәлек капиталы уйлап тапҡан булды. Минеңсә, урындарҙа тейешлесә эш хаҡы булған предприятиелар төҙөлһә, ирҙәр ғаиләһен ҡарарлыҡ, торлаҡ менән тәьмин итерлек аҡса алып эшләһә, бындай капиталдың бер ҙә кәрәге булмаҫ ине. Юғиһә, яңғыҙ ҡатын-ҡыҙҙарҙың күбеһе тап уны алыр өсөн бала таба. Әммә баланы табыу - бер, уны үҫтерергә, тормош юлына баҫтырырға ла кәрәк бит. Урында эшең булып, тейешенсә түләһәләр, тулы ғаиләләр бергә йәшәп, бала тәрбиәләһә, дәүләткә Әсәлек капиталына миллиардлаған һум аҡса тотонмайынса ла демография торошон ыңғай хәл итеп булыр ине. Ә минең кеүек юғары белем алғандар, йәғни дәүләт аҡсаһын түккән белгестәр үҙ тармағында күпкә файҙа килтерер ине, тип уйлайым.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ШӘМБЕ ҺАЙЫН...

## ишегемде шаҡый

**Беҙҙең ғаиләлә республиканың төп башҡорт баҫмаларын элек-электән алдырҙылар. Бәләкәй саҡта, хәҙерге кеүек, почтальондар йорттан-йортҡа йөрөп, гәзит-журналға яҙылырға өгөт-нәсихәт уҡыманы. Эш хаҡы йәки пенсия таратҡанда квитанция тултыралар ҙа шуның менән вәссәләм. Әсә телендә ваҡытлы матбуғатҡа яҙылмау башҡа һыймаған эш була торғайны.**

(Дауамы 2-се биттә).




12+

✓ Былтыр республикабыҙ етәксеһе "вахтовиктар" мәсьәләһе менән ҙур ҡыҙыҡһыныу белдергәс, күптәрҙә тыуған яҡҡа ҡайтып, яҡшы эш хаҡы алып эшләү өмөтө уянғайны. Был өмөт ҡуҙы йәштәр күңелендә һаман бысҡый әле...



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Вахта ысулы менән ситтә эшләүселәр һаны буйынса Башҡортостан, элеккесә, алдынғы урындарҙы биләй. Төрлө сығанаҡтарҙан 160 меңгә яҡын кеше Себер тарафтарында, шулай уҡ Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек һәм башҡа ҙур ҡалаларҙа эшләй. Ни өсөн һеҙ ситтә эшләүҙе хуп күрәһегеҙ?***

***Хәлит ҠУНАҠҠУЖИН, Күмертау ҡалаһы:*** Бына уйлап ултырам да, уйылып китерлек бит: "Бер ай атай йәки ир" режимы менән эшләүемә лә утыҙ йылға яҡын булып бара икән...

Ситтә эшләүҙе хуп күргәнем өсөн сығып китмәнем мин, эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ мәжбүр итте. Болалы, ғауғалы, билдәһеҙ туҡһанынсы йылдар башы ине... Колхоз тарҡалып, йәғни ауылдағы берҙән-бер тигәндәй эш урыны менән тәьмин иткән ойошма юҡҡа сыҡҡас та, бөтә булған мөлкәтебеҙҙе ике сумаҙанға һыйҙырып, ауырлы кәләшемде эйәртеп, Күмертауға килеп баш төрттөм. Тәүҙә бер туған апайымда өйҙәш булып йәшәнек. Эш хаҡы етерлек булмағас, бер предприятиенан икенсеһенә, өсөнсөһөнә күсеп йөрөп, бер йыл тигәндә Себер сыҡтым да киттем. Ҡайҙа ғына, кем генә булып эшләмәнем икән - хәҙер аныҡ ҡына әйтеүе лә еңел түгел. Һуңғы йылдарҙа Алыҫ Төньяҡта быраулаусы ярҙамсыһымын. Яртышар йыллап ситтә йөрөгән мәлдәр ҙә булды. Шул дәүерҙә өс балаға атай булдым, ҙур йорт һалдым, балалар уҡыттым, өйләндерҙем, хәҙер олатаймын инде.

Шуға иғтибар иткәнем бар: Себер тарафтарында һәм башҡа яҡтарҙа вахта ысулы менән эшләгәндәрҙең өйҙә ҡалған яҡындары, ғәҙәттә, был хаҡта ҙур ғорурлыҡ менән һөйләргә ярата. Йәнәһе лә, ире йәки улы "ҙур" аҡса эшләп алып ҡайта... Ә бына вахтасылар үҙҙәре генә ундай йөрөүҙәре менән һис тә ғорурланмай, һәр хәлдә, минең яҡын-тирәлә ундайҙар юҡ. Айҙар буйы ғаиләнән, бигерәк тә балаларыңды күрмәй йөрөү кемде шатландырһын инде?

Айырыуса һуңғы осорҙа бергә эшләгән егеттәр араһында бәләкәйерәк эш хаҡына булһа ла эш табып, өйҙәрендә, тыуған ҡалаһында, ауылында ҡалырға риза булғандар йышыраҡ осрай башланы. Ситкә бер кем дә, хатта йәштәр ҙә "романтика" эҙләп сығып китмәй. Үҙҙәренең ғаиләләрен тейешенсә тәьмин итеп, үҙенең фатирын йәки йортон булдырыу өсөн йөрөй улар.



Тағы ла шул иғтибарҙан ситтә ҡалмай: вахтанан һуң ҡала урамдарына сыҡһаң, эшкә һәләтле йәштәге ир-егетте бик һирәк осратаһың. Был эш көнөндә генә түгел, шәмбе, йәкшәмбелә лә шулай. Был, тимәк, республиканың күпселек көслө заты "оҙон" аҡса артынан ситтә йөрөй тигән һүҙ.

Ир-аттың ситтә эшләүенә бөгөн беҙ өйрәнеп тә бөттөк кеүек. Әммә улар артынан был юлға ҡатын-ҡыҙҙар ҙа баҫты. Хәҙер балаларҙы ата-әсәһе түгел, ә уларҙың олатай-өләсәйе тәрбиәләй. "Оҙон аҡса" артынан сығып киттеләр, тигәнде йыш ишетергә тура килә. Тик был һүҙбәйләнеш (оҙон аҡса) хәҙер ысынбарлыҡҡа тура килмәй. Бынан 10-15 йыл элек, бәлки, Себер аҡсаһы менән бындағы араһында айырма булғандыр. Хәҙер уның да бәрәкәте юҡ. Күп ойошмалар юл хаҡын түләмәй. Юл, азыҡ-түлек, эш кейеме сығымдарын ҡайтармағалар, бер ай эшләп, бер ай ял иткәнен һүшһаң, бындағынан әллә ней айырмаһы ла юҡ. Тик ни эшләһендәр? Тыуған, йәшәгән ерендә эш булмағас...

Балаларҙың үҫкәнен дә, үҡып сығып, ҡайһы арала өйләнерлек булғанын да күрмәнем. Хаҡлы ялға сыҡҡас, исмаһам, ейәндәремде тәрбиәләргә ине. Был - проблеманың бер яғы ғына, уға беҙ өйрәнеп тә барабыҙ кеүек. Ә вахта ысулы менән эшләгәндәрҙең киләсәк быуыны нисек булыр икән? Ошо хаҡта ваҡытлы матбуғат биттәрендә әлегә бер материал да осратҡаным юҡ. Ғалимдарҙың, социологтарҙың был мәсьәлә буйынса эҙләнеүҙәр, тикшереүҙәр, һорауҙар алып барыуына иманым камил. Тик улар власть сәйәсәтенә тура килмәйҙер, тип уйлайым. Шуға күрә, ул киң йәмәғәтселек ҡарамағына сығарылмай.

Был мәсьәләнең мине борсоуының үҙ сәбәбе бар. Етенсе быуын олатайымдың Буранбай исемле ағаһының улы Ғәбит 1824 йылда һөргөнгә ебәрелә. Уның өс улы, тиҫтәләгән ейәнейәнсәре булып, бөгөн ир затынан был фамилияны йөрөткән бер кем дә ҡалманы. Эш нимәлә тип уйлайһығыҙ? Бына шунда: атай тәрбиәһе күрмәгән балаларҙа рухи ныҡлыҡ булмай сыға. Бында һүҙ йыраҡ олатайҙарына оҡшап, ҡырыҫ холоҡло булыуҙа ғына түгел, ә тотош бер нәҫелдә илһөйәрлек, туған йәнлелек кеүек сифаттар һалынмауҙалыр. Ә бөгөнгө атай тәрбиәһе күрмәгән быуын нисек булып буй еткерер ҙә, үҙе кемде тәрбиәләр?

Бушҡа ғына атай-олатайҙарыбыҙ, аталы бала арҡалы, тип әйтмәгән ҡалдырмағандыр бит. Әйтем нигеҙендә ҙур мәғәнә ята. Өйөндә атаһы булған малайҙарҙың тамағы туҡ, өҫтө бөтөн булды. Урамға сыҡһаҡ, атайҙары булған малайҙарға хатта олораҡ малайҙар ҙа һүҙ әйтеп барманы, сөнки улар ҙы яҡлар атайҙары бар ине. Атайҙар беҙҙе бесән сабырға ла, балта-сүкеш тоторға ла өйрәтте, Ватан һаҡсыһы, ғаилә башлығы нәҡ ир заты эше, ир бурысы тип тәрбиәләне. Ярай, мин хәҙер оло быуын вәкиле. Минең менән әле өйләнмәгән егеттәр ҙә, йәш атайҙар ҙа эшләй. Өсәр ай, ярты йыл вахта ысулы менән эштә йөрөгән, ҡайтҡас өйҙә "ял" иткән атайҙарҙан ни фәтүә?

Урындарҙа эш урындары булдырыуҙы ойошторһы урынға илдең көслө затын төньяҡҡа ебәреп, ваҡытлыса эш хаҡы менән тәьмин итергә әллә ни аҡыл кәрәкмәйҙер ҙә ул. Ә бына ҡалаларыбыҙҙа завод-фабрикалар төҙөп, киләһе быуындарҙы ла эш урындары менән тәьмин итеү өсөн һәләтле етәкселәр табыу ҙа ҡыйын түгелдер бит. Тик быныһ өсөн ысын илһөйәр булыу ғына кәрәк. Былтыр республикабыҙ етәксеһе "вахтовиктар" мәсьәләһе менән ысын мәғәнәһендә ҙур ҡыҙыҡһыныу белдергәс, күптәрҙә тыуған яҡҡа ҡайтып, яҡшы эш хаҡы алып эшләү өмөтө уяна биреп ҡуйғайны. Был өмөт ҡуҙы йәштәр күңелендә һаман бысҡый әле...

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# ШӘМБЕ ҺАЙЫН...

## ишегемде шаҡый

**(Башы 1-се биттә).**

Шуға күрә республикала "Киске Өфө" тигән башҡортса яңы баҫма барлығын ишеткәс, танышып та тормай, уға яҙылдым. Гәзит сыға башлағанда мәктәптә эшләп йөрөй инем әле. Гәзит биттәрендә донъя күргән материалдарҙы дәрестәрҙә ҡуллана башланым. Баҫма йәйләп ярҙамсыма әйләнде, һуңынан кәңәшсемә. Уҡыусыларыма ла баҫмаҡың ярҙамын, башҡа гәзиттәрҙән өҫтөнлөктәрен аңлаттым.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, уларҙың "Киске Өфө"гә һылтанмаларын ишетеп шатландым, тимәк, тырышлығым бушҡа китмәгән, балалар дөрөҫ юлда бара. Нисә йәштә булһаң да эргәңдә тоғро дуҫың, бер үк ваҡытта кәңәшсең дә булыуы шатлыҡлы ваҡиға, әлбиттә. Ә "Киске Өфө"нө бер һайлағандар уны ташламаҫ. Быға минең иманым камил.

Күптән хаҡлы ялдамын, ләкин бер яратып өлгөргән баҫма һаман да һәр шәмбе һайын беҙҙең йорт ишеген шаҡый. Исеменән күренеүенсә, гәзит баш ҡалала йәшәгәндәр өсөн тәғәйенләнһә лә, ул бөтә республика халҡына ла файҙалы. Бигерәк тә башҡорт ырыуҙары тарихына бағышланған материалдар фәһемле, бөгөнгөһө тураһында ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыйым. Тәрбиә темаһына яҙылғандар педагогтар өсөн дә, мәктәп тормошонан ситтә торғандарға ла кәрәк. Бер балаһы булған һәр атай-әсәй ҙә ниндәйҙер кимәлдә педагог бит.

Гәзит биттәрендә әлегерәк Ислам диненә ҡағылышлы мәҡәләләр йыш осрай торғайны. Бөгөн улар һирәгәйгәндән-һирәгәйә бара. Дин - халыҡты тәрбиәләүҙең бер юлы, быны бер ҡасан да онотоғға ярамай. Баҫма уртаһының ике битен биләгән диалогтар үтә лә ҡыҙыҡлы. Башҡа гәзиттәрҙә геройҙарҙан алынған интервьюлар менән танышып сыҡҡас, журналист нимә һорарға белмәгән кеүек фекер тыуа. Ә "Киске Өфө" хәбәрселәренең геройҙарына төрлө яҡлап, ҡыйыу-ҡыйыу һорауҙар биреүе уларҙың холоҡ-фиғелен, көндәлек тормошҡа ҡарашын ныҡлыраҡ асып һалырға ярҙам итә.

Баҫма биттәрендә сит тарафтарҙа көн иткән милләттәштәребеҙ тураһында ла материалдар күргәндә һөйбәт булыр ине. Тыуған телебеҙ мәсьәләһенә ҡағылышлы мәҡәләләр ҙә фәһемле булаcаҡ. Минең үҙемә шәхсән тел белгестәре Рәшит Шәкүр, Вәкил Хажиндарҙың был темаға ҡағылышлы сығыштары оҡшаны.

**Асия ЛАТИПОВА,**
**Мәләүез районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе. Указдың яңы редакцияһында балиғ булмағандарға ата-әсәһеҙ сауҙа үҙәктәренә барыу тыйылмай. Шулай уҡ бынан алда 65 йәштән өлкәндәр, шулай уҡ хроник сирҙәре булғандар өсөн индерелгән изоляция тәртибе 2020 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтыла.

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 18 декабргә мәғлүмәттәре буйынса, тәүлек эсендә 159 кеше яңы коронавирус инфекцияһын йоҡторған. Пандемия башланғандан алып республикала ауырығандарҙың дөйөм һаны - 16 944. Бер тәүлектә тағы ике сирле коронавирустан вафат булған. Рәсми статистика буйынса, бөтәһе 117 кеше донъя ҡуйған. Дауахананан тыш пневмония осраҡтары арттан, тәүлегенә - 416 кеше.

✓Рәсәй Федерацияһы Президенты В.В. Путиндың сираттағы, 16-сы матбуғат конференцияһы, быйыл видеоконференц элемтә менән берлектә тура бәйләнештә үтте. Журналистар менән был ҙур осрашыуҙа ил етәксеһе бөгөнгөбеҙҙең көнүҙәк мәсьәләләре - азыҡ-түлеккә хаҡтар менән бәйле хәл, коронавирус менән көрәштә властарҙың эше һәм яуаплылығы, бәләкәй һәм урта бизнесҡа, шулай уҡ балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы, сит илдәр менән мөнәсәбәттәр кеүек проблемалар хаҡында 4 сәғәт ярым буйына алты тиҫтәнән ашыу һорауға яуап бирҙе.

✓Башҡортостанда Торатау итәгендә башҡорт Ҡыш бабайы резиденцияһы асылды. Ҡунаҡтарҙы унда 19 декабрҙән көтәләр, ләкин алдан яҙылырға кәрәк. "Торатау" геопаркы етәкселәге һүҙҙәренсә, яңы йыл программаһынан тыш, ҡышҡы күңел асыуҙар: аттар егелгән санала йөрөү һәм башҡа саралар ҡаралған.Шулай уҡ геопарк резиденттары "Еҙем буйлап атлы тур", "Санала Мәмбәткә", "Изге шишмәләр", "Дөйәгоштарға ҡунаҡҡа" кеүек ҡышҡы турҙар әҙерләгән.

✓"Башавтотранс" автобустарында Башҡорт теле көнөнә ҡарата башҡортса баннерҙар һәм видероликтар күрһәтелә башланы. Акция барышында халыҡҡа яңы дата тураһында мәғлүмәт бирелә, улар башҡорт телендәге фразалар һәм тәрән мәғәнәле һүҙҙәр менән таныша.

✓ Былтыр эштән ҡайтҡанда баш ҡалала туҡталғайным. Шунда "Өйҙә эшләү бәхет" тигән лозунгыны күреп ҡыуанғайным. Үҙ өйөңдә йәшәп, тыуған ереңдә файҙалы булып, шунда эшләүгә етмәй бит инде.



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Вахта ысулы менән ситтә эшләүселәр һаны буйынса Башҡортостан, элеккесә, алдынғы урындарҙы биләй. Төрлө сығанаҡтарҙан 160 меңгә яҡын кеше Себер тарафтарында, шулай уҡ Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек һәм башҡа ҙур ҡалаларҙа эшләй. Ни өсөн һеҙ ситтә эшләүҙе хуп күрәһегеҙ?**

***Гөлнур СӘҒӘҘИЕВА, Салауат ҡалаһы:*** Һөнәрем буйынса ашнаҡсымын, һатыусы таныҡлығым да бар. Стәрлетамаҡ, Салауат ҡалаларында ашханала ла, супермаркеттарҙа ла эшләнем. Тик эш хаҡы тауыҡ көлкөһө ине. Ҡуртымға алған фатирға түләүҙән аҡсаны тартып-һуҙып байтаҡ йәшәнек. Ошо аҡсаһыҙлыҡ, хәйерселек арҡаһында өйҙә көндә тиерлек талаш-ыҙғыш тыуып ҡына торҙо. Иремдең Себергә сығып киткеһе килмәй. Йәйен төрлө төҙөлөш ойошмаларында бер аҙ аҡса һуҡҡан була ла, ҡышын бот күтәреп ята. Бала үҫә, түңәрәктәргә, секцияларға йөрөтөргә машинаһы ла, аҡсаһы ла кәрәк.

Ситкә сығып китеүе еңел булманы, оҙаҡ уйландым. Былай йөрөһәм, фатир ҙа, машина ла, алмаш кейем дә булмаясаҡ, тинем дә, тәүәккәлләнем. Өфөлә лә, Мәскәүҙә лә, Питерҙа ла, Пермдә лә эшләнем. Балыҡ цехында ла, ҡунаҡханала йыйыштырыусы ла, һауыт-һаба йыуыусы ла булдым. Шуның иң ҡыйыны, минеңсә, кухня эшсеһе йәки һауыт-һаба йыуыусы, ашнаҡсыларға ярҙам итеүсе булғандыр. Бер ялһыҙ ай буйы ун икешәр сәғәт ҡулың һыуҙа булһын әле! Ҡул тиреһе ебеп, сейләнеп, тишелеп бөтә торғайны. Өйгә ҡайтһаң, элек бергә эшләгән әхирәттәр, хеҙмәттәштәр, күршеләр "сибирячка"нан һалдырып килеп етә. Улар, әлбиттә, мин күп аҡса алып ҡайта тип уйлай торғайны. Ә минең эшләгәнем тәүҙә ике яҡҡа юлды ҡапларға һәм бер аҙ йәшәргә генә ҡала ине. Сер бирмәнем, бурысҡа һорағандарына биреп торҙом, "йыуҙыр" тигәненә йыуҙырҙым, әммә бер нисә вахтанан һуң былдай күңел асыуҙарҙы ташланым, башҡа төрлө ял итеү сараларын таптым. Ауырлыҡ менән бирелгән аҡсамды экономияларға өйрәндем. Әйткәндәй, һауыт-һаба йыуа башлағас, аҡсаһы булды булыуын, ашнаҡсылар менән бер сама алып йөрөнөм. "Түҙгән - түш ите ейгән" тигән әйтем бар халҡыбыҙҙа. Эштән ана китәм, бына китәм тип йөрөгәндә ашнаҡсы итеп ҡуйҙылар. Һәм бына ун йылдан ашыу һөнәрем буйынса эшләйем.

Минең менән эшләгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһе лә ситтә эшләргә ашҡынып тормай, быға иманым камил. Үҙҙәре эштә булһа ла, күңелдәре менән барыһы ла өйөндә, балалары, ата-әсәһе янында. Эш ваҡытында ла, эш араһында ла балалары менән телефондан йә дәрес әҙерләйҙәр, йә дарыу эсәләр, ашарға бешерәләр. Дүртәү эшләйбеҙ, дүртебеҙҙең береһенең генә әлегә ире түҙә. Ҡалғандарыбыҙҙыҡы йә икенсе ҡатынға сығып киткән, йә эскегә һалышып, айырылышҡандар. Минеке лә оҙаҡҡа түҙмәне. Әммә ситкә сығып киткәнемә үкенмәйем: яңы йорттан фатир алдым, улымды түләүле юғары уҡыу йортонда уҡытам. Әле ул да вахта менән эшләп йөрөй. Икебеҙгә бер булһа ла машинабыҙ бар. Бынан ун биш йыл элек илай-илай ситкә сығып китмәһәм, ошоларҙың береһе лә булмаҫ ине. Быны мин үҙем менән элек бергә эшләгән ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарап әйтәм. Әле булһа ҡуртымға алынған фатирҙа көн күрәләр.

Бына, мәҫәлән, әхирәтемде генә алайыҡ. Ире менән икеһенең айлыҡ дөйөм килеме 40 мең тирәһе. Ике балалары ла юғары уҡыу йорто студенты. Иғәнә индерергә аҡсалары булмағас, ипотека ла ала алманылар. Фатир алыр өсөн икендең береһе Себергә сығып китмәйенсә, өләсәйең-олатайыңдан, әсәйең-атайыңдан мираҫҡа ҡыҫыҡ бер бүлмә булһа ла ҡалмаһа, бындағы эш хаҡына нисек кенә тырышһаң да, ҡыйыҡлы булып булмай.

Бында, мин эшләгән ойошмала, төрлө милләт кешеләре бар. Шулай ҙа күбеһе - Башҡортостандан. Айырыуса Баймаҡтан күптәр. Шулай уҡ республиканың төньяғынан байтаҡ кеше эшләй. Барыһы ла берҙәм, дуҫ, бер-береһенә ярҙам итеп йәшәйҙәр. Башҡа тарафтарҙан килгәндәр ҙә башҡорттарҙың татыу булыуын билдәләй. Ғөмүмән, ярҙамсыллыҡ - бында, ситтә йөрөгәндә, иң кәрәкле сифат. Унһыҙ булмай, бында үҙен генә ҡайғыртҡандар оҙаҡ тотҡарлана алмай.

Былтыр эштән ҡайтҡанда баш ҡалала туҡталғайным. Шунда "Өйҙә эшләү бәхет" тигән лозунгыны күреп ҡыуанғайным. Үҙ өйөңдә йәшәп, тыуған ереңдә файҙалы булып, шунда эшләүгә етмәй бит инде. Беҙҙең беребеҙ ҙә ҡоторғандан сығып китмәгән. Республикала яҡшы эш хаҡы менән яңы эш урындары барлыҡҡа килһә, әлбиттә, береһе лә Яҡутстанға, Ямалға, Камчаткаға йәки Мәскәүгә юл тотмаҫ ине. Яҡын киләсәктә Башҡортостанда индустриаль, агросәнәғәт һәм технопарктар төҙөлмәһә, белмәйем, халыҡ, айырыуса ир-егет артабан ни эшләр инде?

Ситтә йөрөгәнсе, ҡайтып үҙ эшен асһалар, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнһәләр, бөтөп барған ауылдарҙы тергеҙһәләр була инде, тигән фекер һуңғы осорҙа йыш осрай интернетта ла, киң мәғлүмәт сараларында ла. Әгәр ҙә урындағы халыҡтың кеҫәһендә аҡса булмаһа, һинең асҡан магазиныңа кем йөрөй? Мин бына үҙем ҡала ситендә сәйхана асыу хыялы менән янам. Тик унда кем йөрөр? Юл буйы кафеһы түгел, эҫе сәй эсеү урыны. Һөтләп, ҡоймаҡлап, баллап... Үлән сәйҙәре, буҙа, ҡымыҙ һатыуҙы ла ойошторорға булыр ине. Ауылды тергеҙеү, крәҫтиән-фермерлыҡ хужалыҡтарын асыу өсөн дә башланғыс капитал кәрәк. Шуға, әлегә өйҙә, йәғни тыуған яҡта эшләү - бәхет, тигән лозунг беҙҙең өсөн түгел.

Ғөмүмән, эшселәрҙе, белгестәрҙе республикала ҡалдырыу буйынса аныҡ программа кәрәк, минеңсә. Артабан да ошолай дауам итһә, ғаиләләр айырылышып, тарҡалып бөтәсәк. Оҙаҡ йылдар эшләү тәжрибәһенән сығып әйтәм: айҙар, йылдар буйы ситтә йөрөп, ир-егеттәрҙең үҙ ғаиләләренән, балаларынан ситләшеү осрағы тураһында күп ишеткәнем, күргәнем бар. Бала тәрбиәләүҙә ҡатнашмайҙар, уларҙың проблемаларынан ситтә торалар. Ҡайтҡас, ҡунаҡ ҡына булып йөрөйҙәр ҙә тағы - эшкә, сөнки туйҙарҙы, юбилейҙарҙы уның ҡайтыуына тура килтереп үткәрәләр. Өйөндәге күп мәсьәләне белмәй ҙә ҡалалар, аҙаҡтан иһә белгеләре, төшөнгөләре лә килмәй башлай. Аралашҡанда хатта шундай фекер белдереүселәр ҙә бар: ҡайтып, бер-ике аҙна булғандан һуң, күптәр кире эшкә китергә теләй, сөнки бында, йәғни ситтә ике ҡулға - бер эш, ашарға әҙер, бер ниндәй проблема хәл итергә түгел. Сит тарафта йөрөгәндә онотола башлаған ғаилә мәшәҡәттәре, балалар тәрбиәләү, ата-әсәләргә ярҙам итеү һәм башҡа ул юҡта йыйылып килгән ҡырҡмаһа ҡырҡ төрлө көнкүреш мәсьәләләрен хәл итергә кәрәк. Етмәһә, уның ял итергә ҡайтыуын аңлап етмәгән, ул өйҙә юҡта йорт эштәрендә булышлыҡ иткән күрше-күлән унан да шундай уҡ ярҙам көтә. Бына шуныһы - аяныслы...

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# УЙЫНДАН УЙМАҠ СЫҠМАҺЫН...

**Был хаҡта өндәшмәй ҡалырға ла була ине, әлбиттә. Һәр хәлдә, бер яҡтан, республика бюджеты өсөн 120 млн әллә ни ҙур юғалтыу ҙа түгел һымаҡ, әгәр киләсәктә акциз түләмдәре килеменән был сумманың байтаҡҡа күберәк күләмдә кире ҡайтарылыуына иҫәп тотолоуын уйлаһаң... Ләкин был - киләсәккә иҫәп, ә бөгөн иртәгә ни булырын фаразлауы ла бик ҡыйын. Тимәк, сығымды ҡаплатыу ниәте әлегә "иләнмәгән-һуғылмаған".**

Һүҙҙең ни хаҡында барыуы аңлашылғандыр: коронавирус пандемияһына бәйле, бизнесҡа дәүләт ярҙамы сиктәрендә республика һыра компаниялары милеккә һалымдан азат ителеп, уйламағанда-көтмәгәндә ана шундай йомарт бүләккә "лайыҡ" булды. Әлбиттә, был компаниялар иң тәү ярҙамға мохтаж медицина, һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә лә, туҡланыу- аҙыҡ-түлек етештереү тармағына ла ҡарамай. Һыра һәм башҡа шундай алкоголле эсемлектәрҙе туҡланыу ризыҡтары иҫәбенә индерергә тел әйләнмәй һәм был дөрөҫ тә булмаясаҡ. Законда ла бит ул "спиртлы эсемлектәр продукцияһы" тигән термин менән телгә алынып килә. РФ Президенты В.Путин дәүләт ярҙамына лайыҡ тармаҡтарҙы билдәләгәндә, уларҙы "милли иҡтисад өсөн мөһим һәм системаны булдырыусы (системообразующий)" өлкәләр тип атап киткәйне. Һыра ҡайнатыу шөғөлөн был йәһәттән дә хөрмәткә эйә тип әйтеп булмай. Шунлыҡтан да, ахыры, тота килеп, тап ошо компанияларҙы 2020-2023 йылдарға бюджет иҫәбенә милеккә һалымдан азат итеү процедураһы йәмәғәтселектә ризаһыҙлыҡ тыуҙырмай ҡалманы. Етмәһә, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарының, коммунистар менән ЛДПР партиялары ҡаршы булыуға ҡарамаҫтан, күпселек тауыш менән ошо ҡарарҙы йәһәтләп законлаштырып ҡуйыуы ла яҙыҡ ғәмәл тойолдо. "Кем-кем, ә бына бындай ярҙамға күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙе бушлай хеҙмәтләндереүсе фитнес-үҙәктәр, спорт ҡоролмалары тәү сиратта лайыҡтыр, сөнки улар халыҡ һаулығын нығытыу буйынса эшләй. Беҙҙең фракция халыҡты эскелеккә йәлеп итеүгә ҡаршы", - тип белдерҙе был хаҡта БР Дәүләт Йыйылышының ЛДПР фракцияһы етәксеһе Вячеслав Рябов. Коммунистар партияһы фракцияһы етәксеһе Юнир Ҡотлоғужин да үҙҙәренең был ҡарарға ҡаршы тауыш биреүе, эскелеккә һәм һыраға юл асыуҙы еңелләштереүсе мөмкинлектәр булдырыусы сараларҙы хупламауҙарын, бигерәк тә йәштәрҙе һыраға бәйлелектән ҡотолдороу юлдарын эҙләргә кәрәклеге тураһында белдерҙе.

Быларҙы ла, ярай, "Берҙәм Рәсәй"ҙәр һымаҡ, ишетмәмешкә һалышырға, иғтибар итмәҫкә була ине. Тик тап шул саҡта, бөгөнгө хәүеф-хәтәрҙәрҙән албырғаған моңһоу тынлыҡты боҙоп, кемдеңдер көр тауыш менән: "Стадиондарға һыраны ҡайтарыуҙы "категорически" (автор һүҙе үҙгәртелмәй алынды) хуплайбыҙ, был беҙгә көйәрмәндәр йәлеп итергә һәм маркетингта ныҡ ярҙам буласаҡ", - тигәне ҡолаҡты ярып инде. Баҡтиһәң, был бер спорт клубы яғынан килгән тауыш икән. Көйәрмән һөйөүен һыра менән дөрләтеп ебәрмәксеме әллә улар? Эйе, бындай "Эврика!"нан һуң республика һыра компаниялары тағы ла дәртләнеберәк ҡайната башлар инде көйәрмән эсемлеген. Бындай уйҙан ҡыҙмаса уйындар башланып, унынан уймаҡ килеп сыҡмаһа, ярай ҙа бит...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфө - Инйәр - Белорет юлында "Ҡурай" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте Архангел районы биләмәһендә юл буйы сервисы төҙөй. Проект Башҡортостан Башлығы үткәргән "Инвестиция сәғәте"ндә тәҡдим ителде. Компания директоры - 32 йәшлек Тимерғәле Ураҙголов кафеһы, ҡунаҡханаһы, фермерҙар етештергән аҙыҡ-түлек менән сауҙа итеү урыны, балалар майҙансығы, мәсете, автомобиль туҡталҡаһы булған комплекс төҙөргә ниәтләй. Бурысҡа аҡса алыу планлаштырылмай, инвестор үҙенең 130 миллион һум аҡсаһын һала. Объектта 85 эш урыны булдырыласаҡ.

✓Башҡортостанда дүрт меңдән ашыу пар коронавирус арҡаһында никахлашыуҙы күсерергә хәл иткән. Бының төп сәбәбе - COVID-19-ға бәйле эпидемик хәл һәм шул арҡала индерелгән сикләү саралары. Республикала март-октябрь айҙарында бөтәһе 13 889 никах теркәлгән.

✓Урал аръяғының баш ҡалаһы Сибайҙың төп майҙанында бер нисә яңы йыл арт-объекты ҡалҡып сыҡты. Улар - "Бүләк", "Ҡурай", "Йыл символы Үгеҙ", йөрәк, даға, ҡояш формаһындағы аркалар. Ҡала мэры Рөстәм Афзалов "ошо матурлыҡты тыуҙырыу өсөн айҙан ашыу алһыҙ-ялһыҙ эшләгән" Халыҡ мәҙәниәте үҙәгенең һәләтле ижади төркөмөнә рәхмәт белдерҙе. Оҫталар - Тимур Мөрсәлимов, Раил Латипов, Тимур Исмәғилев, Анатолий Насакин, Евгений Столбов, Илһам Таһиров, Лилиә Рәхмәтуллина.

✓Мостай Кәримдең повесы буйынса төшөрөлгән "Өс таған" фильмы Ҡытайҙа 15-се Халыҡ-ара балалар киноһы фестивалендә иң яҡшы балалар фильмы тип танылды. Был хаҡта фильмдың режиссеры Айнур Асҡаров хәбәр итте. Фестиваль 2020 йылдың 22-30 ноябрендә Гуандун провинцияһы Гуанчжоу ҡалаһында уҙҙы. Был "Өс таған" фильмының тәүге наградаһы түгел, картина байтаҡ кинофестивалдәрҙә юғары баһаланды.

✓Башҡортостандың мини-лапта буйынса йыйылма командаһы Йошкар-Ола ҡалаһында уҙған Рәсәй кубогында алтын миҙалдар яуланы һәм ил чемпионатында бишенсе булды. Республиканан ярыштарҙа Өфө һәм Ҡырмыҫҡалы райондары спортсылары Дмитрий Данилов, Айҙар Әхмәҙуллин, Вадим Борханов, Эльмир Миһранов, Ильмир Шафиҡов, Руслан Байтимеров, Родион Вәлиев һәм Рәмил Лутыев ҡатнашты.

***✓ Колл-үҙәк аша Күмертауҙан Әлгизә Туҡтарованың балаларына ваҡытында пособие алып еткермәүенә зарланған хатын уҡынылар. Был мөрәжәғәткә ҡарата Башҡортостан Башлығы тейешле органдарҙан оператив яуап талап итте.***



ҠЫҪҠАСА

# ДИАЛЕКТЫҢ НИНДӘЙ?

**Республикала Башҡорт теле көнө уңайынан тест үтергә мөмкин булған сайт эшләй башланы.** Ул һинең ниндәй диалектта һөйләшеүеңде билдәләй - төньяҡ-көнбайыш, көньяҡ йәки көнсығыш. Бөгөн 720-нән ашыу кеше тест үткән дә инде. "Башҡорт телендә өс диалект бар: Урал арьяғы, көньяҡ һәм төньяҡ көнбайыш. Ошо өс диалектлы төҙөлөш - дөйөм ҡабул ителгән ғилми факт. 80-се йылдарҙа Өфөлә Рәсәйҙең билдәле төркиәтселәре ҡатнашлығында уҙған Бөтә союз диалектология конференцияларында диалекттар тураһында шундай ҡарарға килгәндәр", - тип хәбәр итте тест авторҙары.

✓ **"Торатау" Конгресс-холында Башҡортостандың милли геройы, 112-се Башҡорт (16-сы Гвардия) кавалерия дивизияһы, Рәсәй Геройы генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов һәйкәленең иң яҡшы проекты конкурсында ҡатнашыусыларҙың эштәрен күрһәтеү тамамланды. Һәйкәл Өфөнөң Совет майҙанында ҡуйыла.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров теләге булғандар өсөн 14-16 декабрҙә асыҡ ишектәр көнө иғлан иткәйне. Конкурс комиссияһы һәр фекерҙе иҫәпкә алырға тейеш, тип билдәләне ул. Ике көн эсендә "Торатау" конгресс-холына 189 кеше килде.

✓ **Башҡортостанда Ковидҡа ҡаршы колл-үҙәктә ковид-госпиталдәрҙең белешмә хеҙмәте эш башланы.** Белешмә хеҙмәте ковид-госпиталдәрҙә дауаланған пациенттарҙың туғандарына уларҙың хәле тураһында һорауҙарға оператив яуап биреү өсөн булдырылған. 12 декабрҙән башлап ул көн һайын көндөҙгө сәғәт 3-тән киске 5-кә тиклем эшләй. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән килешеп, был ваҡытҡа стационарҙарҙа пациенттар тураһында мәғлүмәт бирә алған белгестәрҙең дежурлығы ойошторолған.Ковидҡа ҡаршы колл-үҙәк Яңы йыл байрамдары осоронда ла эшләй. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфөлә күп каналлы 218-19-19 телефоны буйынса көн һайын иртәнге 8-ҙән киске 8-гә ҡәҙәр белгестәргә һорауҙар менән мөрәжәғәт итергә була.

✓ **Башҡортостанда, былтырғы кеүек үк, яңы йыл каникулдарында спиртлы эсемлектәр һатыу сикләнә.** Белеүегеҙсә, республикала ғәмәлдә булған законға ярашлы, Башҡортостанда 3 ғинуарҙа алкоголь һатыу тыйылған, 4, 5 һәм 6 ғинуарҙа уны һатыу ваҡыты көндөҙгө сәғәт 2-нән иртәнге 10-ға тиклем сикләнгән. Йәғни ошо өс көндә республика биләмәһендә иҫерткес эсемлектәр менән тәүлегенә дүрт сәғәт - иртәнге 10-дан көндөҙгө 2-гә хәтлем генә сауҙа итергә мөмкин. Яңы йыл каникулдарында алкоголь менән сауҙа итеүҙе сикләүҙән тыш, Башҡортостанда Йәштәр көнөндә, Белем көнөндә һәм һабантуйҙар ойошторолған көндәрҙә "ҡоро закон" ғәмәлдә.

*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*

# КҮҘМӘ-КҮҘ АРАЛАШЫУ ҠИММӘТЕ



**Рәсәй Федерацияһы Президенты В.В. Путиндың сираттағы, 16-сы матбуғат конференцияһы, быйыл билдәле сәбәптәргә бәйле яңы форматта - видеоконференция рәүешендә үтте. Журналистар менән был ҙур осрашыуҙа ил етәксеһе аҙыҡ-түлеккә хаҡтар менән бәйле хәл, коронавирус менән көрәштә властарҙың эше һәм яуаплылығы, бәләкәй һәм урта бизнесҡа, шулай уҡ балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы, сит илдәр менән мөнәсәбәттәр кеүек проблемалар хаҡында 4 сәғәт ярым буйына алты тиҫтәнән ашыу һорауға яуап бирҙе.**

"Илдәге хәлдәргә ҡағылышлы төрлө каналдарҙан миңә бик күп мәғлүмәттәр килә, ләкин минең өсөн беҙҙең кешеләр, Рәсәй Федерацияһы граждандары менән туранан-тура аралашыуҙан да ҡиммәтерәк бер нәмә лә юҡ. Нисек һәм ниҙәр менән йәшәйбеҙ, яҡшыраҡ йәшәү өсөн ниҙәр эшләргә кәрәклеге хаҡында уларҙың фекерен ишетеүҙән дә ҡиммәтерәге юҡ", - тине инеш һүҙендә Владимир Путин.

***Башҡа илдәргә ҡарағанда Рәсәй пандемияны сағыштырмаса әҙерлекле ҡаршыланы, тип иҫәпләй В.Путин.*** Эпидемия арҡаһында ил иҡтисады АҠШ һәм Европаның башҡа алдынғы илдәренә ҡарағанда аҙыраҡ зыян күрҙе, шулай уҡ беҙҙең һаулыҡ һаҡлау системаһы ла һөҙөмтәлерәк эшләй, тине ул. Дөйөм вакцинацияны коронавирусҡа ҡаршы һөҙөмтәле сара һәм уны мотлаҡ эшләтеү кәрәклегенә баҫым яһау менән бер рәттән, Президент уның теләк буйынса башҡарыласағын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. Белгестәр тарафынан Рәсәй вакциналары хәүефһеҙ һәм уларҙың һөҙөмтәлелеге юғары һаҡлау сифатына эйә тип танылды, ул 97 процент кимәлендә.

***Илдә ҡайһы бер аҙыҡ-түлек төрҙәренә хаҡтар артыу менән бәйле тура һәм ғәҙел һорауҙар бик урынлы яңғыраны был осрашыуҙа:*** илдең ауыл хужалығы тармағы эске ихтыяжға етерлек күләмдә иген һәм көнбағыш культуралары, шулай уҡ шәкәр етештереүгә ҡарамаҫтан, тәү сиратта тап ошо киң ҡулланыу ризыҡтарына хаҡтар артыуы менән ризаһыҙлыҡ белдереүҙәргә ил етәксеһе был хәлде, йомшағыраҡ итеп әйткәндә, мәғәнәһеҙлек тип атаны һәм бының төҙәтерлек мәсьәлә булыуына ҡәтғи баҫым яһаны. Аҙыҡ-түлеккә хаҡтар артыуына ваҡытында мөнәсәбәт белдергән булһа, хөкүмәткә баҙар ысулдарын ҡулланыу юлы менән был хәлде көйләргә булыр ине, ләкин әле лә хәлде төҙәтергә була, эшләргә кәрәк, тине ул.

***Яңы йылға балалы ғаиләләрҙәге 7 йәшкә тиклемге һәр бала дәүләт тарафынан 5-әр мең һум аҡса аласаҡ.*** Бынан тыш, яңы йылдан балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы бер балаға йәшәү минимумы күләмендә арттырыласаҡ, әгәр ғаилә килеме уның һәр ағзаһына ҡарата бер йәшәү минимумынан артмаһа. Был программа ғаиләләге балалар 7 йәшкә еткәнгә тиклем дауам ителә һәм уларҙың йәшенә ҡарап, өс этапта үтә.

***Йәше буйынса эшләмәгән пенсионерҙарға киләһе йыл инфляциянан юғарыраҡ кимәлдә - 6,3 процент күләмендә индексация ҡарала.*** Эшләүсе пенсионерҙарҙың килеме лә ҙур түгел, улар теге йә был эш урынына башҡалар килмәгәнлектән эшләп йөрөргә мәжбүр. Пенсионерҙарҙың ошондай эштә мәшғүл булыуы менән дәүләт үҙе ҡыҙыҡһыныу күрһәтә. Был категория пенсионерҙар ҙа өҫтәмә дәүләт ярҙамына мохтаж, тигән фекерҙе лә хуплауын белдерҙе Президент.

Быларҙан тыш, халыҡ-ара хәлдәр, АҠШ һәм уның яңы президенты менән мөнәсәбәттәр, 2024 йылда буласаҡ президент һайлауҙарына ҡарата, ауылдарға газ үткәреү, эске туризм, экология, сүп-сар реформаһы барышы, мәктәптәрҙә һәм юғары уҡыу йорттарында онлайн уҡыу һәм уҡытыу мәсьәләләре һәм хатта балалар тәрбиәһендә анимация, мультфильмдарға ҡағылышлы һорауҙарға тиклем журналисар ентекле яуаптар алды. Үкенескә ҡаршы, Башҡортостан журналистарының әүҙемлек күрһәтмәүе күңелде ҡырҙы: улар араһынан бер генә һорау биреүсе лә булманы. Уның ҡарауы, колл-үҙәк аша Президентҡа Күмертауҙан Әлгизә Туҡтарованың балаларына ваҡытында пособие алып еткермәүенә зарланған хатын уҡып ишеттерҙеләр. Үҙ сиратында был мөрәжәғәткә ҡарата Башҡортостан Башлығы тейешле органдарҙан оператив яуап талап итте. "Туҡтарова балаһына тейешле пособиеларҙы ваҡытында алған, ул был һорауҙы өҫтәмә түләүҙәргә ҡағылышлы биргән булған. Беҙҙең тарафтан мәсьәлә ваҡытында хәл ителгән", - тип яуап бирҙе БР ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ӨФӨЛӘ ЯҠЛАЯСАҠТАР




**Башҡортостанда "Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының телдәре һәм әҙәбиәте: башҡорт теле һәм әҙәбиәте" йүнәлеше буйынса диссертация советы эш башланы.**

Был хаҡта республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов хәбәр итте. Диссовет республика етәксеһе Радий Хәбировтың Рәсәй Федерацияһының Фән һәм юғары белем биреү министрлығына үтенесе буйынса тергеҙелде. "Башҡорт дәүләт университеты коллективы менән мөһим бурысты атҡарҙыҡ. Беҙ "башҡорт теле һәм әҙәбиәте" белгеслеге буйынса диссертация советын кире ҡайтарҙыҡ", - тип уның һүҙҙәренә аңлатма бирҙе Радий Хәбиров. Ул Азат Бадрановҡа һәм мәғариф министры Айбулат Хажинға советҡа йәнә ябылыу хәүефе янамаһын, ә үҫешһен өсөн уны етди рәүештә күҙәтеп барырға ҡушты. "Беҙ башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса бөтөнләй яңы диссертация советын ойоштorҙоҡ. Етәксеһе - филология фәндәре докторы, шәрҡиәт һәм башҡорт тел ғилеме кафедраһы профессоры Хәҙисә Солтанбаева. 11 ноябрҙә беҙҙә ике кандидатлыҡ диссертацияһын яҡланылар, юғары аттестация комиссияһының һөҙөмтәләрен көтәбеҙ. Киләһе йылға тағы бер нисә диссертация сиратта тора", - тине "Башинформ" агентлығына Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы, филология фәндәре докторы Гөлфирә Абдуллина.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы республиканың ҡала-район хакимиәттәре араһында "Иң яҡшы яңы йыл ҡаласығы" конкурсын иғлан итте. Конкурста ҡатнашыу өсөн муниципалитеттарға үҙ биләмәһендә иң яҡшы Яңы йыл ҡаласығын һайлап алырға һәм уларҙа уҙғарылған сараларҙы яҡтыртыу эшен ойоштороорға кәрәк. Еңеүселәр дүрт номинацияла билдәләнәсәк.

✓15-31 декабрҙә Өфөлә 43 майҙансыҡта ылыҫлы ағастар менән сауҙа итеү ойоштоpола. Ҡағиҙә булараҡ, шыршы баҙарҙары өсөн халыҡ күп йөрөгән урындар һайланған. Яңы йыл символын - шыршыны, аҡ шыршыны, ҡарағайҙы шулай уҡ ҙур сауҙа предприятиелары эргәһендәге биләмәләрҙә һәм ял көндәрендә уҙғарылған ауыл хужалығы йәрминкәләре майҙансыҡтарында һатып алырға мөмкин.

✓Өфөлә 2020 йылдың 11 айында 429 ВИЧ-инфекция осрағы асыҡланған, был уҙған йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда 207 осраҡҡа аҙыраҡ, тип хәбәр итте Республика СПИД-ты иҫкәртеү үҙәгенең баш табибы Рафаэль Яппаров. 31 октябргә Өфөлә ВИЧ-инфекция диагнозы менән 7 487 кеше иҫәпләнгән. Пандемияға бәйле үҙәктең эш тәртибе үҙгәрҙе. Анализ алыу һәм вирусҡа ҡаршы препараттар таратыу өсөн йәшәгән урынға махсус бригадалар сыға. Шулай уҡ дежур телефон эшләй, инфекционистар онлайн консультация бирә.

✓Өфөнөң "Батыр" спорт мәктәбенең дүрт тәрбиәләнеүсеһе билбаулы көрәш буйынса донъя чемпионы исемен яуланы. Көрәшселәр Ҡаҙанда 31 илдән 150-нән ашыу спортсы ҡатнашҡан беренселектән алтын миҙалдар менән ҡайтты. Почет пьедесталының беренсе баҫҡысында - Камилла Елисеева, Артур Зөлҡәрнәев, Наил Мөхәмәтйәнов, Дмитрий Балянов. Өфө спортсыларында донъя чемпионатының көмөш миҙалдары ла бар. Алена Фәттәхова, Илфаҡ Ибәтуллин һәм Илнар Сәлимйәнов икенсе урынды алды.

✓Башҡортостандан ике спортсы Ярославль ҡалаһында уҙған халыҡ-ара шашка буйынса Рәсәй кубогында алдынғы урындарҙы яуланы. Ишембайҙан Агата Парахина пьедесталдың - беренсе, Елена Мильшина - икенсе баҫҡысында. Ирегеттәр турнирында Өфөнән Марсель Шәрәфетдинов - икенсе, Янис Сафин - дүртенсе. Республиканың йыйылма командаһында Ишембай һәм Өфө шашкасылары сығыш яһаны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ Ишле ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларға 16 меңдән ашыу бүләк һатып алынған. Ғаиләләр уларҙы халыҡҡа социаль ярҙам үҙәктәре һәм "Ғаилә" үҙәктәре аша алырға мөмкин.**



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ЯҢЫ ЕТӘКСЕ КИЛДЕ

**16 декабрҙә Өфө ҡала советының сираттан тыш ултырышында депутаттарға ҡала мэры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы кандидатураһы тәҡдим ителде.**



Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин йыйылыусыларҙы быға тиклем Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары булып эшләгән Сергей Греков менән таныштырып: "Сергей Николаевич Ишембайҙа тыуһа ла, бөтә ғүмере Өфө менән бәйле. Уның ете бала атаһы булыуы ла күп нәмә хаҡында һөйләй. Ҡала алдында ҙур бурыстар тора. Улар ағымдағы коммуналь мәсьәләләр, 2024 йылда Өфө ҡалаһының нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығын билдәләүгә әҙерлек һәм уны үткәреү. Ваҡыт аҙ, ә юбилей пландары бик күп. Шуға ла ҡалала етәксе булырға тейеш. Беҙ ҡаланың яңы етәксеһенә идара итеү командабыҙҙа эшләү һәм бай тормош тәжрибәһе заман һынауҙарын лайыҡлы үтергә ярҙам итер, тип ышанабыҙ", - тине.

Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары вазифаһына тиклем Сергей Греков республиканың нефть химияһы тармағында эшләгән. Плеханов исемендәге Рәсәй иҡтисад академияһын тамамлаған. "Газтехресурс" яуаплылығы сикләнгән ширҡәт ойоштороп, уның етәксеһе булған. Нефть табыу һәм быраулау өлкәһендә ҡорамалдар һәм технологиялар эшләү һәм уларҙы ҡулланылышҡа индереү менән шөғөлләнгән "Пилот" техник системалар фәнни-тикшеренеү институтын ойоштороусыларҙың береһе. Шул уҡ системала эшләүсе "Ойл-Автоматика" яуаплылығы сикләнгән ширҡәт нигеҙләгән. Был предприятиеларҙың барыһы ла Өфөлә теркәлгән.

Үҙенең сығышында Өфө ҡалаһы хакимиәте вазифаһына ваҡытлыса тәғәйенләнгән Сергей Греков өстөнлөклө бурыстарҙы билдәләне, аныҡлап әйткәндә, ҡала халҡы үҙен унайлы тойһон өсөн Өфөнө тағы ла матурыраҡ итеү, тине. Шулай уҡ матбуғат саралары журналистары менән осрашҡанда ла ул төп мәлдәргә иғтибар йүнәлтте һәм транспорт менән тәьмин итеү, Дәүләт циркы, Рус драма һәм Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры кеүек социаль һәм йәмғәт әһәмиәтендәге инфраструктура проекттарын һәм башҡа эштәрҙе тормошҡа ашырыуҙы тәү сиратта билдәләне. Бынан тыш, башҡа проблемалар ҙа етерлек һәм улар ҙа планға ярашлы хәл ителәсәк. Был маҡсаттар - Сергей Николаевичтың мэр вазифаһына кандидатура һайлау буйынса үткәрелгән конкурста енеү яулаған осраҡта башҡарыласаҡ пландарының бер өлөшө. Ә инде вазифаның "ваҡытлыса башҡарыусы" тигән өлөшө алып ташланғас, ул үҙен ғәҙел һәм һөҙөмтәле етәксе итеп күрһәтергә ниәтләй. Шулай уҡ тотош команда һөҙөмтә өсөн эшләүгә йүнәлеш аласаҡ.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БАЙРАМ ИТМӘЙҘӘРМЕ?

**Башҡортостанда быйыл коронавирус пандемияһы арҡаһында балалар өсөн республика шыршыһы булмай. Уның урынына байрамда ҡатнашырға тейеш булғандарҙың барыһына ла республика Башлығы исеменән яңы йыл бүләктәре таратыла.**



Төп яңы йыл иртәлегенә башлыса уҡыу алдынғылары, олимпиада һәм спорт ярыштары еңеүселәре, фестиваль лауреаттары, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең, инвалид һәм ишле аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән - бөтәһе 800-ләгән бала саҡырыла торғайны. 28 һәм 29 декабрҙә республикала балалар өсөн асыҡ һауала театрлаштырылған иртәлектәр һәм Ҡыш бабай, әкиәт геройҙары менән Яңы йыл уйындары үткәреләә. Шулай уҡ яңы йыл каникулдары осоронда муниципалитеттарға Яңы йыл ғаилә уйындары-2021 уҙғарырға тәҡдим ителде. Ишле ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларға 16 меңдән ашыу бүләк һатып алынған. Ғаиләләр уларҙы халыҡҡа социаль ярҙам үҙәктәре һәм "Ғаилә" үҙәктәре аша алырға мөмкин.

Социаль приюттарҙа яңы йыл тамашалары сит кешеләрҙе саҡырмайынса ғаилә төркөмдәрендә генә ойоштороло, ә балаларға Яңы йыл ҡотлауҙарыны яҙмаһы күрһәтелә. Быйыл инвалид балалар өсөн ойоштоРола торған Аксаков шыршыһы ла булмай. Уларға шәхси ҡотлауҙар ебәреләсәк.

Ҡарттар йортонда йәшәгәндәргә лә Яңы йыл менән күп кешене йәлеп итмәйенсә ҡотларға йыйыналар. Әйтәйек, "Минең ҡәҙерле ҡарттарым" ойошмаһы 18 интернат өсөн учреждениеның тәҙрә ҡаршыһында Ҡыш бабай менән ҡотлауҙар ойоштора.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ӘСӘМ ТЕЛЕ...

**Башҡорт теле байрамы алдынан баш ҡала урамдарына махсус баннерҙар урынлаштырылды. Уларҙың ҡайһы берҙәре ябай ғына сәләмләү һүҙҙәренән тороп, башҡорт һәм рус телдәрендә бирелгән. Бынан тыш, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәренең портреты һәм тел тураһында ҡанатлы һүҙҙәре, шиғыр юлдары урын алған.**













# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Веналарҙа ҡан йөрөшө туҡтағанда

Олоғайғанда ла хәтер яҡшы булһын өсөн мейегә ҡан йөрөшөн хәстәрләргә кәрәк. Медицина тәҡдим иткән дауанан тыш, халыҡ кәңәштәренә лә ҡолаҡ һалығыҙ. Веналарҙа ҡан йөрөшө туҡтауға бәйле баш "тубалдай булып" ауыртһа, сейәнең емеш һабағы, дегәнәк, кейәү үләне (чабрец), ҡайын бөрөһө, ҡандала үләне (донник), еркәүек (лабазник), ҡуянтубыҡ (пастернак), бәпембә һәм татлы тамыр (солодка) үләндәре тамырҙары файҙалы. Уларҙы айырым да, тигеҙ күләмдә бергә ҡушып та төнәтмәләр яһарға була.

❖ 1-2 ҡалаҡ еркәүек үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне йылы көйөнсә ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ ҡандала үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 15 минут парҙа быҡтырырға. Шунан 45 минут төнәтеп, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

❖ Кукуруздың емешлек ауыҙынан эшләнгән төнәтмә организмдан артыҡ шыйыҡсаны сығарырға ярҙам итә. Уны әҙерләү өсөн 1-2 ҡалаҡ әҙерләмәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2-3 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. 1-3 ҡалаҡ төнәтмәгә бал ҡушып, көнөнә бер нисә тапҡыр эсергә.

## Бронхит

❖ Эмалле кәстрүлгә 2 стакан һыу ҡойоп, алма ҡабығын һалырға һәм кәрәкенсә шәкәр ҡушып ҡайнатырға. Ҡайнатманы көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

❖ Торманы ваҡ ҡына шаҡмаҡтарға турап, кәстрүлгә һалырға һәм шәкәр һибергә. Шунан духовкала 2 сәғәт бешерергә. Артабан торманы һөҙөп ташларға, ҡалған шыйыҡсаны шешәгә ҡойоп алырға. Дауаны көн дауамында 3-4 тапҡыр, ашарҙан алда 2-шәр балғалаҡ ҡабул итергә. Айырыуса йоҡлар алдынан ашарға.

❖ Бронхит һәм пневмония осрағында ҡаҡырыҡлы йүтәл йонсотһа, һарымһаҡ һуты һәм һөт файҙалы: 1 стакан һөткә 1 балғалаҡ һут. Йоҡлар алдынан йылытып эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ Ә бына ауыл хужалығы малдары ҡатнашлығында булған юл-транспорт ваҡиғаһы осрағында хәлдәр ҡатмарлыраҡ. Бындай аварияла ике яҡ та зыян күрә. Автомобиль эйәһе лә, малдың хужаһы ла...



ЙОЛАҢДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Оҫтабикәләрҙең ижади мөмкинлектәрен мозаиканы аппликация менән аралаштырыуы айырыуса киңәйткән. Ҡораманы ҡорама өҫтөнә тегеү бындай ҡул эштәренең бер төрө булып торған: тура мөйөшлө ҡыя шаҡмаҡ эсенә шаҡмаҡ тегелгән, уның эсенә - ҡыя шаҡмаҡ, тура дүртмөйөш йәки бәләкәйерәк шаҡмаҡ. Ҡорамалар ҡапма ҡаршы төҫтәрҙән һайлап алынған. Төҫтәр теҙмәһен диагональ буйынса асыҡ һаҡларға (бер төрләрәк итергә) тырышҡандар, әммә был еңел булмаған. Силәбе өлкәһе Яҡуп ауылынан булған сыбар һүрәтле юрғанда ҡыҙыл, күк, аҡ, ҡара, шәмәхә, көрән, ҡара йәшел, алһыу һәм башҡа төҫтәрҙе күрергә була. Улар бигерәк хикмәтле рәүештә өсәрләп тоташтырылған (шаҡмаҡ-ҡыя шаҡмаҡ-шаҡмаҡ). Мәҫәлән, алһыу төҫтәге шаҡмаҡ эсенә ҡара ҡыя шаҡмаҡ, уның өҫтөнә ҡыҙыл шаҡмаҡ тегелгән. Шулай уҡ шундай берләштереүҙәр осраған: ҡыҙыл-алһыу-шәмәхә, ҡыҙыл-ҡараҡ, күк-ҡыҙыл-көрән, алһыу-ҡыҙыл-йәшел, ҡара-йәшел-ҡыҙыл. Бик сыбар булһа ла, бер тәртип һиҙелгән: һәр ваҡыт тиерлек ҙур фигуралар сиге буйлап ҡыя шаҡмаҡтарҙа бер төҫтәге ике өсмөйөш күбәләк формаһында тоташҡан, иң йышы - ҡыҙыл һәм күктәр. Былар мозаика панноның колоритын билдәләгән.



*Ике ҡатлы аппликациялы шаҡмаҡтарҙан торған юрған (Силәбе өлкәһе). Автор фотоһы. 1972*

Байрам кейеҙҙәрен биҙәүгә бәйләп тасуирланған туй келәмдәре һәм сергетыштарындағы ҡыя шаҡмаҡ һәм өсмөйөштәрҙән торған аппликациялар мозаика сәнғәтенә яҡын торған. Төрлө төҫтәге фигуралар билдәле бер тәртип буйынса аҫҡа ҡуйыла торған ерлек һыҙаттарына тегелгән, ә улары үҙ сиратында әйбергә тоташтырылған - ҡыҫан (рамка) йәки параллель һыҙыҡтар рәүешендә. Ҡайһы бер осраҡта ҙур ҡыя шаҡмаҡтар уртаға тезеп тегелгән. Өсмөйөштәр һыҙаты биҙәкле ерлек тирәләй ҡыҫан кеүек ҡайма барлыҡҡа килтергән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

КӨНАУАЗ

# МАЛЫҢДЫ ҠАРАСӘЛЕ,

## юл ситендә йөрөмәһен!



**Башҡортостан парламенты ауыл хужалығы малын көтөү һәм ҡыуыу тәртибен боҙғаны өсөн яуаплылыҡҡа бәйле закондың үтәлеш һөҙөмтәлелеген тикшерә. Билдәле булыуынса, быға күптән түгел үҫмерҙәр үлеменә килтергән юл-транспорт ваҡиғаһы сәбәпсе булды.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостандың Әбйәлил районында 6 декабрь төнөндәге авария бер юлы өс баланың ғүмерен өҙҙө. 16 йәшлек үҫмер атаһының автомобилен йөрөтөргә алған. Билдәле инде, был йәштә уның транспорт менән идара итеү хоҡуғын биргән водитель таныҡлығы ла булмаған. Машинаға үҙе менән ике дуҫын да ултыртҡан. Юлда китеп барғанда ҡолонло бейә менән бәрелешкәндән һуң, өсәүһе лә йән биргән.

Был, әлбиттә, берҙән-бер осраҡ түгел. Йыл һайын республиканың төрлө төбәгендә, айырыуса урманлы яҡтарҙа ауыл ерлегендәге юл-транспорт ваҡиғаларына йыш ҡына шәхси һәм фермер хужалыҡтарындағы йылҡы һәм һыйыр малы сәбәпсе булыу, унда кешеләрҙең йәрәхәтләнеүе, һәләк булыуы хаҡында киң мәғлүмәт сараларынан әленән-әле ишетелеп тора. Йәйләү осоронда ғына ҡабатланған хәл түгел был. Фажиғә ҡышҡы мәлдә лә осрай. Тап ошо малдар ҡатнашлығында булған аварияларҙың һаны күбәйеүе был мәсьәлә буйынса контролде көсәйтеү бурысын ҡуйҙы ла инде.

Автомобиль тәгәрмәсе аҫтына шулай уҡ ҡырағай хайуандар ҙа эләгә. Бигерәк тә Башҡортостанда мышы менән бәйле осраҡтар күп теркәлә. Айырыуса уларҙың "туйлаған" осоронда ошондай бәхетһеҙ осраҡтарҙың күбәйеүе билдәле. Шулай уҡ ҡабандар, ҡоралайҙарҙың көтмәгәндә юлға сығып, фажиғәгә сәбәпсе булыуы мәғлүм. Йөнлектәр ҡатнашлығындағы аварияларҙа, билдәле инде, ғәйеплеләр бөрөү генә - водитель үҙе. Бында фажиғә уның тиҙлек режимын күҙәтмәүе, иғтибарһыҙлығы, күп осраҡта "Ҡырағай йәнлектәр" билдәһен инҡар итеүенә бәйле. Ә бит билдәләр теге йәки был урынға матурлыҡ өсөн генә ҡуйылмай, ә тейешле ведомстволар участканы ныҡлы өйрәнгәндән һуң, хайуандарҙың тәртибен, һыулауға, утлауға йөрөү ихтималлығы булған урындарҙы билдәләгәндән һуң ғына, ике яҡтың да, йәғни водитель һәм кейектәрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында урынлаштырыла.

Хәйер, кейектәр менән аңлашыла инде. Ә бына ауыл хужалығы малдары ҡатнашлығында булған юл-транспорт ваҡиғаһы осрағында хәлдәр ҡатмарлыраҡ. Бындай аварияла ике яҡ та зыян күрә. Автомобиль эйәһенең дә, пассажирҙарҙың да һаулығы һәм ғүмере ҡурҡыныс аҫтында ҡала. Малдың хужаһы ла юғалтыу кисерә... Үҙенең яуапһыҙлығы, закондарҙы һанға һуҡмауы арҡаһында. Башҡортостан территорияһында ауыл хужалығы малдарын көтөүҙе һәм ҡыуыуҙы ойоштороу мәсьәләләрен көйләүгә һәм ветеринар именлекте тәьмин итеүгә, ауыл хужалығы биләмәләрен, сәсеүлектәрҙе һәм үҫемлектәрҙе малдарҙың тапауынан, юҡҡа сығарыуынан йәки уларға зыян килтереүенән һаҡлауға, ауыл хужалығы малдарын урлау осраҡтарын иҫкәртеүгә йүнәлтелгән закон буйынса аварияға булышлыҡ иткән йорт хайуандары өсөн уның хужаһы яуап тота. Әгәр уның эйәһен табып булһа... Йыш ҡына һәләкәткә килтергән һыйыр йәки аттарҙың эйәһен асыҡлап та булмай. Был инде малдың тамғаланмауы хаҡында ғына түгел, ә дөрөҫөрәге, уның хужаһының идентификациялауға ҡағылған закон талаптарын һанға һуҡмауы тураһында ла һөйләй. Был тәңгәлдәге яуапһыҙлыҡҡа, бәлки, ауыл хужалығы малын көтөү һәм ҡыуыу тәртибен боҙған өсөн БР Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекстың 7.3-сө статьяһында билдәләнгән штрафтың бәләкәй булыуы ла булышлыҡ итәләр. Мәҫәлән, граждандар өсөн - 1 меңдән 3 меңгә тиклем, вазифалы кешеләргә - 5 меңдән 8 меңгә тиклем, юридик шәхестәр өсөн 15 меңдән 20 меңгә тиклем. Ошондай уҡ осраҡ яңынан ҡабатланғанда штраф күләмен ике тапҡыр арттырыу ҡаралған.

Мәләүез районы хакимиәтенең ауыл хужалығы бүлеге начальнигы Ринат Бикбулатов билдәләүенсә, "Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә ауыл хужалығы малдарын көтөү һәм ҡыуыуҙы тәртипкә һалыу тураһында" Башҡортостан Законына ярашлы, урындағы үҙидара органдары йылҡы һәм һыйыр малын идентификациялау сараһын күрергә тейеш. Ауыл хужалығы малдарын тамғалау өсөн мөмкин булған һәр ысулды, йәғни тамғалауҙы, бирка тағыуҙы, чип ҡуйыуҙы файҙаланырға мөмкин. Мотлаҡ идентификациялау талабын үтәгән фермер йәки ауыл кешеһе малының хәүефһеҙлеген тәьмин итеү тураһында ғына ҡайғыртмай, ә уның тейешле урында, йәғни көтөүлектә булыуын да хәстәрләй.

Әйе, үрҙә атап кителгән бәхетһеҙлек осрағына эләкмәҫ өсөн малдарҙың мотлаҡ көтөүсе ҡарамағында булыуы бик тә мөһим. Юл буйында, уға яҡын урындарҙа үлән утлаған йәки тибенлектә йөрөгән йылҡы өйөрө, һыйыр көтөүе туристар өсөн генә һоҡланғыс күренеш. Ә водителдәр өсөн улар, ысын мәғәнәһендә, йылдың бөтә миҙгелендә лә ҡурҡыныс менән янай.

**Ләйсән СӘЛИХОВА**
**әҙерләне.**

ИҢ МАТУР ҺҮҘ

# БӘРӘКӘТ



**"Иң матур башҡорт һүҙе" акцияһына "бәрәкәт" һүҙен тәҡдим итер инем. Һүҙынҡы өндәрҙән бер төрлө әйтелеше генә матур итмәй уны. Йөкмәткеһе яғынан да бик бай һәм әһәмиәтле ул. Уны бер нисә мәғәнәлә лә ҡулланырға мөмкин.**

Иң беренсе, ул башҡорт телендәге байлыҡ, муллыҡ тигән мәғәнәне бирә. Мәҫәлән, халҡыбыҙҙа "Хәрәкәттә - бәрәкәт" тигән әйтем бар, йәғни эшләгән кеше бай була. Тағы шулай тип тә әйтәләр: "Был кеше үҙе менән бәрәкәт алып килде". Был осраҡта йортҡа именлек, ҡот алып килде, тип аңларға мөмкин.

Оҙаҡҡа еткән әйбергә, башлыса аҙыҡ-түлеккә, аҡсаға ҡарата "бәрәкәтле булды" тип тә әйтәбеҙ. Был осраҡта был һүҙҙең мәғәнәһе файҙалы, һөҙөмтәле, экономиялы булды тигәнгә ҡайтып ҡала.

Ымлыҡ булараҡ та ҡулланалар уны. Мәҫәлән, минең бер туған апайым был һүҙҙе көнөнә әллә нисәмә тапҡыр әйтә. Беҙ берәй яңылыҡ ишетһәк, ғәжәп итһәк, хайран ҡалһаҡ, ҡулдан берәй нәмә төшөп китһә, берәйһен уйламағанда осратһаҡ, ауыҙыбыҙҙан иң беренсе ниндәй һүҙ сыға? "Атаҡ" йәки "Әстәғәфирулла" һүҙҙәре иң йомшаҡ әйткәнелер, шулай бит? Ә минең апайым ошондай осраҡта, тәү сиратта, һуҙып тороп "Бә-рә-кәәт!" ти.

Уларҙың йорто юл ыңғайында ғына. Ҡала аша үткән һәр кем уларға һуғылмай үтмәй. Йорттарына бик һалғандарын бер кем дә күргәне юҡтыр. Ишектәре лә, йөҙҙәре лә һәр кемгә асыҡ. Килгән кешене ашатып-эсереп, ял иттереп сығарып ебәрәләр. "Ҡунаҡ менән бәрәкәт килә", тигәнде лә унан беренсе тапҡыр ишеткәйнем. Теләк теләгәндә лә: "Аллаһы Тәғәлә һинең ғаиләнә, бала-сағаңа һәм малыңа бәрәкәт бирһен", - тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡабатлай ул. Аҙаҡ ҡына был теләктең "Бәрәкәт доғаһы" булыуын аңланым.

Эйе, һәр нәмәнең үҙ бәрәкәте бар: мал-мөлкәттеке - уның бөтмәүе, юҡҡа сыҡмауы, файҙалы булыуы; ғаиләнеке - уның имен, татыу, бәхетле, мөхәббәтле булыуы; ғүмерҙеке - уның оҙон һәм изге эштәр менән үтеүе.

Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә ошо һүҙҙе куберәк ҡабатлайыҡ, яманын әйтмәйек, бер-беребеҙҙең ғаиләһенә, эшенә, балаларына бәрәкәт теләйек!

**Лена БАРЫЕВА.**

✓ *Был әҫәрҙәрҙә төньяҡ башҡорттары - ирәкте, балыҡсы, байҡы, танып, ҡайпан, йәлдәк, унлар ырыуҙарының бер этник тамырҙан яралған булыуын раҫлап, ошо нигеҙҙә уларҙы берҙәмлеккә өндәү идеяһы асыҡ белдерелә.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - ТАНЫП, СЫҒЫШЫБЫҘ - ҠАРА-ТАБЫН

**Танып ырыуы төньяҡ башҡорттары төркөмөнә ҡарай, уның атамаһы Танып йылғаһы менән бәйле: был башҡорт ырыуының аҫаба ерҙәре ошо йылға үҙәненә ҡарай. Танып ырыуы ауылдары хәҙерге Аҫҡын (36 ауыл), Тәтешле (20 ауыл), Балтас (16 ауыл), Ҡариҙел (4 ауыл) райондарында урынлашҡан.**



Рус дәүләте документтарында Танып олоҫо XVII быуат башынан бирле осрай башлай. Әммә, ҡайһы бер башҡа мәғлүмәттәр буйынса, был ырыу башҡорт этник кландары араһында XV - XVI быуаттарҙан уҡ билдәле булған, тип әйтергә була. Өфө провинциаль канцелярияһы чиновниктары тарафынан 1730 йылда төҙөлгән "Башҡорт олоҫтары реестры"нда ошондай мәғлүмәт бар: "Волость Танынская в Таныпских вершинах, и близ Уфы реки, леса и поля; от Уфы тележного пути нет, разве только с нуждой".

Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев билдәләүенсә, башҡорттарҙың Танып берләшмәһенә "ике ысын танып ырыуы (Ҡыр- йәки Ҡара-Танып һәм Һыу (Су)-Танып), шулай уҡ элегерәк үҙаллы ырыуҙарҙан булып, һуңғараҡ, ҡыпсаҡ осоронда, уларҙың урманлы төньяҡҡа табан хәрәкәте барышында таныптар менән берләшкән ҡаҙансылар һәм ҡайпандар инә".

Хәҙерге тарихсы Салауат Хәмиҙуллин ошо мәғлүмәттәрҙе бер ни тиклем кимәлдә корректировкалау кәрәк, тип иҫәпләй, сөнки Р.Ғ. Кузеев үҙенә билдәле булмаған ҡайһы бер тарихи сығанаҡтарҙы ҡулланмаған. Бында һүҙ Ғәли Соҡорой һәм уның улы Ғарифулла Кейековтарҙың әҫәрҙәрендә булған мәғлүмәттәр хаҡында бара.

Күренекле башҡорт шағиры, яҙыусы, суфый шәйехе Ғәли Соҡорой (Мөхәммәд-`Али бен `Абд Аллах бен Шәриф бен Кийик әл Чукури әл Гари (1826 - 1889) - байтаҡ ҡына поэтик һәм дини әҫәрҙәр авторы, үҙ нәҫеленең шиғри шәжәрәһен яҙа, Ҡара-Табын ырыуы тарихын да ҡағыҙға күсерә. Немец тикшеренеүсеһе Михаэль Кемпер Ғәли Соҡоройҙоң боронғо һәм затлы Ирәкте ырыуы башҡорто булыуы хаҡында яҙа. Уның егерменсе быуын бабаһы Майҡы бей Сыңғыҙ хан идараһы даирәһендә күренекле вәзирҙәрҙән була. Был фаразды ғалим Р.Ғ. Кузеев та раҫлай. Унынса, ирәкте башҡорттары XV быуат аҙаҡтарында - XVI быуат баштарында Ҡаҙан ханлығы сиктәренә хан хеҙмәтенә инеү маҡсатында күсеп килгән ҡара-табын һәм көнбайыш табындарҙың вариҫтары була. Уларҙың яңы атамаһы ирәкте "ҡала һаҡсыһы" тигәнде аңлатып, ваҡыттар үтеү менән этнонимға әйләнеп киткән.

Ғәли Соҡорой, риүәйәттәргә ярашлы, өс айырым башҡорт нәҫеленә нигеҙ һалыусы Ҡара Табын, Байҡы һәм Балыҡсы бейҙәрҙе тарихи шәхес булған Майҡы бей уландары итеп күрһәтһә, уның улы Ғарифулла Кейеков 1913 йылда "Шура" журналында баҫылып сыҡҡан "Иҫке шәжәрәнән" тигән мәҡәләһендә Ҡара Табын ҡушаматлы Ҡарағәзизден Балыҡсы тигән тәүге улының Танып, Уннар, Йәлдәк һәм Йәнсәйет исемле улдары булыуы хаҡында бәйән итә. Ә Таныптан Ҡайпан һәм Янапай исемле улдар тыуа.

Был әҫәрҙәрҙә төньяҡ башҡорттары - ирәкте, балыҡсы, байҡы, танып, ҡайпан, йәлдәк, унлар ырыуҙарының бер этник тамырҙан яралған булыуын раҫлап, ошо нигеҙҙә уларҙы берҙәмлеккә өндәү идеяһы асыҡ белдерелә. Танып башҡорттарының ҡасандыр ҡеүәтле табын вариҫтары булыуы хаҡындағы мәғлүмәт ҡайһы бер тарихи сығанаҡтарҙа ла сағылыш тапҡан. Өфө воеводаһы И.И. Чичериндың Танып олоҫо башҡорттары Аҡбирҙе Чичканов һәм Йәнсуба Йәнбәковтың ергә хоҡуҡтары буйынса бәхәсе айҡанлы 1627 йылдың 8 августында төҙөлгән "наказная память" тип аталған документына XVIII быуатта ошондай өҫтәлмә яҙыу теркәлгән: "Табын олоҫтары һәм ерҙәре". Тимәк, батша чиновниктары ла Танып олоҫо ерҙәренең ҡасандыр Табын олоҫонон бер өлөшө булып, ошо ике олоҫ башҡорттарының ҡәрҙәшлеген таныған.

Башҡорт тарихында ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр тыуҙырған тағы ла бер билдәле шәхес - күп һуғыштарҙа ҡатнашҡан, батша властары тарафынан юғары баһалар алып, наградаларға лайыҡ булған Ҡолой Балтасов ҡайһы бер сығанаҡтарҙа Ҡара Табын олоҫо старшинаһы, тип аталһа, икенселәрендә Ҡыр-Танып һәм Һыу (Су)-Танып етәксеһе рәүешендә теркәлә. Тимәк, Танып олоҫо ҡасандыр Табын олоҫо ерҙәренең төньяҡ-көнбайыш өлөшөн тәшкил итеп, ваҡыттар үтеү менән тамам айырымланып, унда көн итеүсе башҡорттар үҙаллы этник төркөмдө - Танып йылғаһы атамаһы менән исемләнә башлаған ырыуҙы хасил иткән. Ул ғына ла түгел, Балыҡсы һәм Ирәкте олоҫтары ла шул уҡ Ҡара-Табын олоҫо башҡорттарынан айырылып сыҡҡан этник төркөм-кландарҙың административ-территориаль берәмеге булып тора. Был халыҡ ижады өлгөләрендә айырым-асыҡ сағылыш тапҡан:

*"Ҡара Танып та*
*ер вирде,*
*Ҡара Табын -*
*атам дирде,*
*Ирәктәне ағам дирде,*
*Былар -*
*бер зат бары, сарпай".*

Ғәли Соҡоройҙоң шиғри шәжәрәһендә лә ошоға бәйле юлдар бар: "Асыл бабам Тубыл, Иртыш кәнарында ирмеш..." Тарихи сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, төркиҙәрҙең уйшын (усунь) этник берләшмәһе (Майҡы - Байку бей ҙә ошо ҡәүем юлбашсыларының береһе булараҡ билдәле тарихи шәхес) ерҙәре Иртыш йылғаһының үрге ағымына тиклем барып етә. Биш төркөмдән хасил булған Майҡы бей олоҫо яугирҙары монголдарҙың Урта Азиялағы һәм Көнсығыш Европалағы походтарында ҡатнаша. Ошо дәүер ваҡиғалары сағылдырылған бер шәжәрәлә былай тип әйтелә: "Сыңғыҙ хан заманында Майҡы бей, Урал тауҙарының Мейәдәк тигән ерендә йәшәп, Мейәс йылғаһы үҙәнендә күсеп йөрөй". Тимәк, таныптарҙың ата-бабалары булған табындар (ҡара-табындар) XIII-XIV быуаттарҙан бирле Көньяҡ Уралда башҡорт исеме менән билдәле булған иң ҡеүәтле халыҡ составына ҡушылып йәшәй башлай. Ул замандарҙа Башҡорт иленең Табын яғы Урал аръяғындағы икһеҙ-сикһеҙ урманлы-далалы ерҙәрҙә йәйрәп ята, был территория хәҙерге Силәбе һәм Ҡурған өлкәләренә ҡарай. Силәбе ҡалаһына ла Ҡара-Табын олоҫо тарханы Таймаҫ Шаимов ерендә нигеҙ һалынған.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



## ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

**"Батырлыҡ өсөн" ("За отвагу") миҙалы менән бүләкләнеүселәр:**

11. Старшина Ҡаһарманов Хәлит Ғиниәтулла улы.
12. Рядовой Кашапов Сәлих Кашаф улы.
13. Сержант Ҡәйүмов Зиннәт Ҡәрип улы.
14. Рядовой Ҡәүемов Варис Ҡәүем улы.
15. Рядовой Миңлеәхмәтов Шәриф Миңлеәхмәт улы.
16. Рядовой Мусин Ғәлим Муса улы.
17. Рядовой Мөхәмәтдинов Ғабдулхаҡ Низаметдин улы.
18. Рядовой Сафиуллин Мәғәфүр Сафиулла улы.
19. Рядовой Сәйфуллин Ниғмәт Сафа улы.
20. Сержант Солтангәрәев Сәйфулла Йәғәфәр улы.
21. Кесе сержант Солтанов Шәриф Солтан улы.
22. Кесе лейтенант Фәйрушин Мирсәйет Байрамин улы - 313-сө полктың 2-се эскадронында сабельниктар взводы командиры.
23. Рядовой Хәкимов Әхмәт Шәйғәрҙән улы.
24. Кесе лейтенант Чернов Иван Логвинович.
25. Сержант Шағәлиев Әхмәт Шағәли улы.
26. Сержант Юлбарисов Шәйбәк Әҙиәт улы.
27. Рядовой Ямалетдинов Камал Ямалетдин улы - 313-сө полк минометсыһы.
28. Кесе лейтенант Яйыҡбаев Ғабдрахман Фәйез улы.
29. Рядовой Яҡупов Әхнәф Әхмәҙулла улы.
30. Сержант Яхин Хәбибулла Яхъя улы.

**"Хәрби ҡаҙаныштары өсөн" ("За боевые заслуги") миҙалына лайыҡ булыусылар:**

1. Сержант Абдуллин Мөхәррәм Лотфый улы.
2. Өлкән сержант Әхмәтшин Исхаҡ.
3. Рядовой Ғәзиев Мәснәүи Ғәли улы.
4. Сержант Гәрәев Ғәлим Гәрәй улы.
5. Рядовой Гуров Иван Гаврилович.
6. Рядовой Дроздов Михаил Иванович.
7. Старший политрук Зәйниев Шәмси Зәйнетдин улы.
8. Старшина Исхаҡов Ғабдулла Ғабдулла улы.
9.Рядовой Килдейәров Миңлейәр Сәғретдин улы.
10. Өлкән лейтенант Курмакаев Александр Леонтьевич - дивизияның штаб начальнигы ярҙамсыһы.
11. Рядовой Латипов Мөхәмәтйән Ғүмәр улы.
12. Өлкән лейтенант Лоҡманов Мохтасар Ғиниәтулла улы.
13. Лейтенант Мәмбәтҡолов Бәҙри Мөжәүир улы.
14. Лейтенант Миначев Ғәлләм Шиһап улы.
15. Кесе лейтенант Нагаев Мөғин Кәрим улы - 101-се артдивизионда орудие командиры.
16. Политрук Низамов Абдрахман Низам улы - 275-се полктың 4-се эскадроны политругы.
17. Лейтенант Окунев Анатолий Иванович.
18. Рядовой Сафин Зәки Закир улы.
19. Лейтенант Сундуков Касьян Ефимович.
20. Кесе лейтенант Тимашев Мисбах Нәби улы.
21. Рядовой Фәтхиев Нурислам Әхмәт улы.
22. Лейтенант Хисмәтуллин Ҡасим Вафа улы.
23. Сержант Шәйхетдинов Фәйзрахман Йәнгир улы.
24. Лейтенант Шакирйәнов Мөслих Шакирйән улы.
25. Сержант Йәрмөхәмәтов Сәйет Шәйәхмәт улы.

Ошо исемлек "Красная Башкирия" гәзитендә (1942 йыл, 21 август, № 197) баҫылып сыҡҡас, унда былай тип яҙыла: "Республика хеҙмәтсәндәре бүләкләнеүселәр араһында һуғышҡа тиклем үҙ Ватаны даны хаҡына намыҫлы һәм бирелеп эшләгән кешеләрҙең таныш исемдәрен осратасаҡ; ул халыҡтың намыҫын һәм азатлығын яҡларға саҡырғас, улар Тыуған ил өсөн бөтөн көстәрен, кәрәк булһа, ғүмерҙәрен дә бирергә әҙер булып, данлы Ватан һаҡсылары рәттәренә баҫты".

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

> ✓ *Барыбер еңеп сыҡтыҡ. Төҙөлөш ойошмалары беҙҙең менән һөйләшмәйенсә, кәңәшләшмәйенсә, ҡурсаулыҡ территорияһында бер бөртөк тә ҡом-балсыҡты урынынан күсерә алмайҙар.*



# ҺАЙЛАП АЛҒАН

**"Башҡара алмаҫлыҡ эш булмай, эшләй алмаған кешеләр генә була", тиҙәр. Әммә был һүҙҙәр уның тураһында түгел. Ни өсөн икәнен ошо әңгәмәне уҡығас аңларһығыҙ. Шулай итеп, танылған тележурналист, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Башҡортостан телевидениеһының алтын фондына ингән "Йөрәк", "Батыр", "Эльбрус", "Янсыҡ", "Мин үлмәнем, башҡорттар", "Ер ҡөҙрәте", "Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Тыуған илгә оҙайлы юл" документаль фильмдары авторы, "Боронғо Өфө" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы республика дәүләт бюджет учреждениеһы директоры Гәүһәр Тимерхан ҡыҙы БАТТАЛОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Алһыу бантик таҡҡан Гәүһәр тигән ҡыҙҙың бала сағында ниндәй хыялдары бар ине? Уның барлыҡ хыялдары ла тормошҡа аштымы? Зәңгәр томандар артындағы киләсәгенә барып етә алдымы ул?**

- Беренсенән, бантик тағырға бөтөнләй яратманым. Уны тағыуҙы мин язаға тиңләнем. Бәләкәйҙән холҡом малайҙарҙыҡы һымағыраҡ ине. Атай-әсәйем уҡытыусы икән, мин тәртипле, барыһына ла үрнәк булырға тейеш булғанмындыр, һәр хәлдә, мине шулай күрергә теләнеләр. Шундай өгөтләү һүҙҙәрен яратмай, мин быларҙың киреһен эшләргә тырыштым. Уҡыуым былай гел "бишле"гә булды. Ә тәртипкә килгәндә, гел малайҙар менән һуғыштым, тәҙрәләр ҙә ваттым. Директорға ла саҡыра торғайнылар. Йәмғәт эштәрендә гел ҡатнаштым. Мишәр менән Йәсин тигән бәләкәй ауылдарҙың уртаһынан йылға аға ине. Ул йылғаға бағышлап, әллә күпме шиғыр ҙа яҙҙым. Бер ваҡыт йылға ҡорой башланы. Тиҫтерҙәремде йыйып, шишмә башын эҙләп киттек. Таҙарттыҡ, һөҙөмтәлә ул йылға әле лә ағып ята. Класташтар осрашһаҡ, һәр ваҡыт ошо ваҡиғаны хәтерләргә яраталар.

Ул заманда һигеҙенсе кластан һуң малайҙар тракторсыға уҡыны, ҡыҙҙар һауынсылыҡҡа. Мин һыйыр һауырға яратмайым, шуға ла малайҙар менән тракторсыға уҡырға киттем. Уҡып сыҡтым, комбайнер ярҙамсыһы булып эшләп йөрөйбөҙ. Бер көн зәп-зәңгәр күк йөҙөнә, йәм-йәшел яланға иғтибар иттем дә, үҙемде алһыу бантиклы ҡыҙ итеп түгел, алһыу күлдәкле ҡыҙ - агроном итеп күҙ алдына килтерҙем. "Мин донъяны матурлаусы кешеләрҙең береһе булырға тейешмен", тип уйланым шул ваҡытта.

**Һиндәге ул саҡтағы романтика барыбер ҙә сәнғәт кешеһенекенә оҡшаған булған бит, Гәүһәр, шулай түгелме? Һәр хәлдә, агрономдыҡы түгел...**

- Нәҡ шулай. Сөнки бер ваҡыт ҡапыл актриса булғым килеп китте. Барҙым сәнғәт институтына. Унда мине Гөлли Мөбәрәкова менән Олег Ханов ҡаршы алды. Өс турҙы үтһәм дә, актерлыҡҡа барыбер үткәрмәнеләр. Ауыл хужалығы институтының агрофагына документ тапшырырға барҙым да, шунда уҡ һүрелдем. Күңелем тартманы. Шунан шиғыр яҙған кеше булараҡ мин ҡайҙа барам инде?

**Башҡорт дәүләт университетынамы?**

- Эйе, БДУ-ға, филология факультетына. Уҡыуҙан тыш, әҙәбиәт, бейеү түңәрәктәренә лә йөрөнөм. Бер саҡ шағирҙар бәйгеһе үтте. Унда Гөлли Мөбәрәкова менән Олег Ханов жюри ағзалары. Рәми Ғариповтың, Рәшит Назаровтың шиғырҙарын һөйләнем. Был бәйгелә өс йыл рәттән мин 1-се урынды алдым. Шунда Гөлли апай менән Олег ағай: "Нишләп һин актерлыҡҡа уҡырға килмәнең, һылыу?"- тинеләр. "Һеҙ бит мине үҙегеҙ алманығыҙ", - тип рәхәтләнеп көлдөм. Хәҙерге күҙлектән сығып, актриса булмағаныма шул тиклем ҡыуанам. Улар мине уҡырға алмай, дөрөҫ эшләгән. Актриса булһам да, уртаҡул булыр инем. Был донъяла уртаҡул актриса булғансы, үҙеңдең яратҡан һөнәрең менән шөғөлләнеү һәйбәтерәктер тип уйлайым.

**Һинең журналистика менән әүҙем шөғөлләнгән сағың үткән быуаттың 90-сы йылдарына тура килә. Шул заманға ниндәй баһа бирәһең?**

- Шул тиклем матур осор. Кемгә әле үҙ ғүмерендә Вәлиди эҙҙәре буйлап бөтә донъяны йөрөп сығыу бәхете тейҙе? Үзбәкстан, Төркиә, Австрия, Германия дәүләттәрендә булып, "Тыуған илгә оҙайлы юл" фильм төшөрөү бәхете. Рәшит ағай Назаровтың үҙе иҫән сағында уның хаҡында фильм төшөрөү бәхете кемгә тейә? Рәшит Назаров тик бер генә урында тере килеш таҫмала, ошо фильмда һаҡланып ҡалды. Күпме эҙләһәк тә, башҡа архивтарҙа беҙ уның тере һынын тапманыҡ.

**Мәшһүр шағирыбыҙ Рәшит Назаров хаҡындағы "Йөрәк" фильмыңды күпме ҡараһаң да, тағы ла ҡарағы килә. Сере нимәлә тип уйлайһың?**

- Ул минең генә хеҙмәт емешем түгел, ижади төркөмдән дә күп нәмә тора. 1989 йылда тәүге тапҡыр командировкаға Бөрйәнгә барҙыҡ. Ул ваҡытта Урал Ғатауллин яҡтыртыусы булып эшләй ине. Ул бөгөн Башҡортостан телевидениеһының баш операторы. Ижади дуҫлығыбыҙ әле лә дауам итә, барлыҡ фильмдарҙы уның менән төшөрәбеҙ. Минән һәр ваҡыт "стартап-менеджер" тип көләләр. Заманында Рәсәйҙәге тәүге "Юлдаш" телеканалын үҙебеҙҙә асҡан ваҡытта беребеҙ ҙә уның нисек булырын, концепцияһын белмәй инек. Күмәк көс менән йырып сыҡтыҡ.

**Шулай ҙа нисек итеп "стартап-менеджер" булыуың гәзит уҡыусыға ҡыҙыҡ булыр ине...**

- 2019 йылда һанлы телевидениеға күсеү башланғас, республика муниципаль телеканалдарға ябылыу ҡурҡынысы янай башланы. Республика етәкселеге уларҙы берләштереүсе кабель селтәрҙәрендәге телеканал зарурлығын белдерҙе. Яңы каналдың етәксеһе Рәмис Дәүләтбаев мине баш мөхәррир итеп эшкә саҡырҙы. Быйыл 11 октябрҙә беҙҙең эшләй башлағанға бер йыл тулды. Башлап ебәргән саҡта беҙҙең менән бергә 11 телестудия эшләһә, бөгөн уларҙың һаны утыҙға яҡын. Ошо юл менән беҙ республикалағы муниципаль телеканалдарҙы һаҡлап ҡала алдыҡ. Элек эфир өсөн телеканалдар үҙҙәре түләй торғайны, хәҙер беҙ түләйбеҙ. Әлегә продакшн юҡ, бер генә тапшырыу - ҡотлау программаһы ғына сығарабыҙ. Программалар араһындағы паузаны тултырыр өсөн нимәләр ҡуйырға кәрәк бит инде. Нимә ҡуйырға тип баш ватҡанда кәштәлә Рауил Бикбаевтың китабы күҙгә салынды. Китапты алдым да, тәүге шиғырҙы уҡыным. Ул "Башҡортостан бында башлана" тип атала ине. Идея шулай тыуҙы. Артабан һәр бер район тураһында режиссер Әлфиә Арыҫланова менән 2-3 минутлыҡ ролик эшләнек. Идеяның йөкмәткеһе - Башҡортостан ошо райондарҙың һәр береһендә башлана. Артабан нисек булһа ла телеканалды йәнләндерергә кәрәк бит инде. Беҙҙең республикала матур һәйкәлдәр күп. Салауат Юлаев та, Шәйехзада Бабич та, Аҡмулла ла, Мәжит Ғафури ҙа, Мостай Кәрим дә, Рәми Ғарипов та һ.б. шиғыр яҙған. Роликта шағирҙар һәйкәлдәре "телгә килеп", үҙ шиғырҙарын һөйләй башланы.

**Әлеге эш урыныңа, "Өфө-II" ҡаласығы тарихи музейына нисек килеп юлыҡтың инде?**

- 2010 йылда республикала етәкселәр алмашынғас, телевидениенан китеп торорға тура килде. Мин эшһеҙ тороп ҡалдым. Дүрт ай эшһеҙ яттым. Шунан һуң Мәҙәниәт министрлығына саҡырып алып, төҙөләсәк яңы музейға директор вазифаһын тәҡдим иттеләр. Музейҙың ул саҡта бер ярым ставкаһы, йылына 200 мең бюджеты бар ине. Ултырырға урыны ла, хатта ручкаһы ла, ҡағыҙ ҙа юҡ. Тракторсы булып, агроном һәм актриса була яҙып, журналист булған кешемен бит әле, ризамын, булам, тинем. Музейға бина мәсьәләһен Юлай Талха улы Ильясов биш минут эсендә хәл итте, уға әле лә рәхмәтлемен. Йөҙгә яҡын квадрат метрлы бинаны бер ай эсендә беҙгә документаль нигеҙҙә тапшырҙылар. Мостай Кәрим һәм Достоевский урамдарының киҫешкән урынында, Өфөнөң ҡап уртаһында "өйлө" булдыҡ. Бөгөн артҡа әйләнеп ҡарайым да, шөкөр итәм, хәҙер музей штатында 18 кеше бар.

**Эште нимәнән башлап ебәрҙең? Нимә генә тимә, һин әлегә бындай эш менән таныш түгелһең...**

- Тәүге эшем "Өфө-II" ҡаласығын популярлаштырыу булды. Уның әһәмиәте, ҡәҙере, ҡиммәте нимәнән ғибәрәт булыуын йәмғәтселеккә алып барып еткермәйенсә тороп, бер нәмә лә эшләп булмаясағын баштан уҡ аңлап өлгөргәйнем. Мин эш башлағанда музей артефакттары БДУ-ның лабораторияһында һаҡлана ине. Музей эше буйынса тәжрибәм булмағас, нисек күҙаллайым, шул рәүешле эшләп алып китергә тура килде. Үҙ эшенә ныҡ бирелгән археологтар, тарихсылар бик һирәк ине, ул әле лә шулай. Археологтар табыуы тележурналистар табыуға ҡарағанда күпкә ауыр. Иң тәүҙә артефакттарҙы БДУ-нан музейға күсерҙек, шунан уларҙы йыуып, таҙартып, номерҙар ҡуйып сыҡҡайныҡ, беҙҙең күҙ алдында шундай матурлыҡ асылды. Урал Ғатауллин етәкселегендәге төркөм менән фотоға төшөрҙөк. "Өфө-II" ҡаласығын сағылдырған монографиялар бар, әммә киң ҡатлам уҡыусылар өсөн китаптар юҡ ине. Эште календарҙар эшләүҙән башланыҡ. Уларҙы күргәҙмәләр ваҡытында һалыуыбыҙ була, шундуҡ алып бөтәләр. Тағы эшләйбеҙ. Бер заман беҙҙең фотолар ике йөҙләп булып китте. 2018 йылда урыҫ һәм инглиз телдәрендә өс бүлектән торған китап итеп сығарҙыҡ. Ул китап һатыуҙа юҡ. Тап шул йылда Нияз Мәжитовҡа арналған халыҡ-ара симпозиум үтте. Шунда ҡатнашҡан барыһына ла беҙ ул китапты бүләк итеп бирҙек. Тәүге һөнәремә хыянат иткәнем юҡ, "Өфө-II" ҡаласығына арналған фильм төшөрөп өлгөрҙөм. Былар барыһы ла киләсәктә ҡаласыҡтың киләсәген дәлилләүгә ҙур аҙым.

**Симпозиумға сит илдәрҙән килгәндәр, ә үҙебеҙҙекеләр нисек ҡабул итә һуң?**

- Ҡаласыҡ буйынса барлығы ҡырҡтан ашыу күргәҙмә үткәрҙек. Кеше эркелеп килә. Тарих менән ҡыҙыҡһынмайҙар, тиҙәр, дөрөҫ түгел, тарих менән ҡыҙыҡһындыра белергә кәрәк. Һәр күргәҙмәнең бер ҡыҙыҡ фекере, экспонаты булырға тейеш. Береһендә беҙ, мәҫәлән, "Өфө-II" ҡаласығының макетын эшләнек. Нияз Абдулхаҡ улы иҫән ине ул саҡта. Ниндәй генә күргәҙмә булһа ла, шул макетты һорайҙар. Резеда исемле рәссамыбыҙ артефакттарҙы күрә лә, үҙенән-үҙе һүрәт төшөрә башлай. Яңыраҡ шулар нигеҙендә "Экспонаттартың йәнле тормошо" тигән күргәҙмә эшләнек. Өҫкә - рәсемде, аҫҡа экспонатты ҡуйҙыҡ. Халыҡ эркелеп килде. Халыҡты, бигерәк тә йәштәрҙе тарих менән ҡыҙыҡһындырыр өсөн гел генә нимәләр уйлап сығарырға кәрәк.

Әйткәндәй, ҡаласыҡта табылған алтынды беҙ "Пробирнадзор"ға бирҙек. Улар хәҙерге көндә донъяла булған иң таҙа алтындарҙың береһе булып сыҡты. "Хан" тигән экспонатыбыҙ төрки кешеһенең йөҙ-һыҙаттарын һүрәтләй, ул ташты мин ныҡ яратам. Тағы ла беҙҙең бәләкәй генә ат уйынсығыбыҙ бар. Шул тиклем матур. Бер заман миңә Илдар атлы рәссам ҡатыны менән килеп инделәр. Улар баяғы атты һигеҙ тапҡырға ҙурайтып эшләп бирҙеләр. Уны күргәҙмә залындағы быяла эсенә ҡуйҙыҡ та, янына бәләкәй атты һалып ҡуйҙыҡ. Кеше иҫе китеп ҡарай.

**Ҡаласыҡ территорияһында йорт төҙөргә теләүселәр менән оҙайлы көрәш эпопеяһы нисек тамамланды? Бер нисә тапҡыр суд та булды шикелле...**

- Эйе, Пушкин урамында туғыҙ ҡатлы йорт төҙөргә тейештәр ине. Беҙ ул йорт төҙөлөшөн туҡтаттыҡ. Юристар менән федераль закондарға таяндыҡ. Икенсенән, ул тирәлә бер туҡтауһыҙ һыу, газ торбалары шартлай, ҡайҙандыр һыу килеп сыға, ҡыҫҡаһы, ҡаланың аҫтында ниндәй процестар бара, шуларҙың күбеһе беҙҙең ҡаласыҡ биләмәһендә сағылыш таба. Аварияляр осрағында тоталар ҙа техника менән килеп эшкә тотоналар ине. Сираттағы тапҡыр ҡаҙый башлағастар, егеттәр һәм ҡыҙҙар менән барып, ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡаршыларына тере сылбыр булып баҫтыҡ. Телевидение саҡырҙым. Экранға сыҡҡас, шаушыу ҡупты ла, эштәрен туҡтаттылар. Икенсе юлы төҙөлөш ойошмаһын судҡа бирҙек. Судта беҙ еңеп сыҡтыҡ. Ҡайтанан улар беҙҙе Юғары судҡа бирҙе. Барыбер еңеп сыҡтыҡ. Шунан һуң төҙөлөш ойошмалары етәкселәре "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығының етди ойошма икәненә инанды. Беҙҙең менән һөйләшмәйенсә, кәңәшләшмәйенсә, ҡурсаулыҡ территорияһында бер бөртөк тә ҡом-балсыҡты урынынан күсерә алмайҙар. Минең турала шундай фекер ҙә тыуған икән: "Ул ҡатын йылмайып ҡына һөйләшә, ултыртһа, бик ҡаты ултырта..."

**Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығын билдәләүгә бәйле саралар планына Өфө-II ҡаласығы ингәнме?**

- 2019 йылдың ғинуар айында "Боронғо Өфө" археологик паркын төҙөү тураһында" Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ҡарар ҡабул итте. Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығын билдәләү буйынса Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың указына ярашлы ҡабул ителгән пландар проектында беҙҙең ҡаласыҡ тураһында һүҙ булмағас, беҙ был йәһәттән үҙебеҙҙең дәғүәбеҙҙе белдерҙек: ысынлап та, ни өсөн Өфөбөҙҙөң боронғолоғон, ҡала-

*✓ Салауат Щербаков Рәсәйҙә генә түгел, донъяла билдәле скульпторҙарҙың береһе. Уның Мәскәүҙә генә 40 һәйкәле ҡуйылған, шуларҙың өсөһө Ҡыҙыл Майҙан янында.*



## ГӘҮҺӘР БАТТАЛОВА:

*Нияз Абдулхаҡ улы менән аралашып, уның Башҡорт ҡалаһы хаҡындағы фекерҙәрен тыңлап өлгөрҙөм. Ул был хаҡта тыныс ҡына һөйләй алмай торғайны, һикереп-һикереп, дәртләнеп-дәртләнеп бәйән итер ине. Минең хыялым бар. Интернетта таралған Меркатор картаһының, Каталон атласының төп нөхсәләрен барып табып, төп нөхсәләге Башҡорт ҡалаһын видеоға төшөрөп алып ҡайтыу һәм халыҡҡа еткереү. Ҡыҙласов, Баталов, Атила Тюрк, Зәйнулла Самашев һәм башҡа ғалимдар раҫлауынса ла, Өфө-II - ул боронғо Башҡорт ҡалаһы. Был мәсьәләлә уларҙың береһенең дә шиге юҡ. Беҙгә хәҙер шуны кире ҡаҡҡыһыҙ итеп раҫларға ғына кәрәк. Бөгөн беҙҙең музей фондында 8 меңдән ашыу артефакт иҫәпләнә, фондты тулыландырыу эшенә бер 2 йыл элек ныҡлап тотондоҡ. Уларҙың һәр ҡайһыһы Өфө урынында боронғо ҡаласыҡтың булыуын раҫлай.*

# ЯҘМЫШЫМ

ларҙың күсәгилешлеген раҫлаған Өфө-II ҡаласығы унда инмәгән һуң? Ул бит туристарҙы үҙенә йәлеп итә торған урындарҙың береһе.

Ысынлап та, ул ерҙең ниндәйҙер бер сихри көсө бар. Унда барһам, минең ҡайтҡым килмәй. Үҙемдән-үҙем хыялдарға биреләм. Әлеге ваҡытта планға инер өсөн документтар әҙерләйбеҙ. Республика етәкселәре 2024 йылға Өфөлә ташландыҡ урындар булырға тейеш түгел, тине бит. Шундай ҡаласығыбыҙ бар икән, ул нишләп ташландыҡ булырға тейеш? Бөгөн беҙҙең иң төп бурысыбыҙ - музей комплексын төҙөү. Беҙ уның бинаһын, археологик тәҙрәләрен күҙ алдына килтерәбеҙ. Республикала археологик һәйкәлдәр күп, әммә артефакттарҙы һаҡлар өсөн махсус депозитарий юҡ. Беҙ әлегә үҙебеҙҙең экспонаттарҙы офистарҙа һаҡлайбыҙ. Закон буйынса алтын-көмөш әйберҙәр дүрт йоҙаҡ аҫтында һаҡлана. Депозитарий төҙөү республикабыҙ башлығының 310-сы указына ла ингән.

Дуҫтар ҙа, дошмандар ҙа бар тигәндәй, бер заман тарихи музейҙың директорының, йәғни минең тарихи юғары белемем булмауы хаҡында яҙа башланылар. Ике йыл буйы яҙып туҡтамағастары, Башҡорт дәүләт педагогия университетының тарих факультетына уҡырға индем. Яңы йыл алдынан, Хоҙай насип итһә, 3-сө юғары белемем хаҡындағы дипломым буласаҡ. Тәүгеһе - Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлау тураһындағы диплом, икенсеһе - Башҡортостан Башлығы янындағы идаралыҡ академияһын тамамлау хаҡындағы диплом. Минә, уҡып арыманыңмы, тиҙәр. Юҡ, тием, кеше ғүмере буйы мәғлүмәт тупларға тейеш, уның мейеһе буш торорға тейеш түгел, тием. Шуға күрә минең ялдарым юҡ, байрамдарым юҡ тиерлек. Әгәр ҙә ял итә, байрам итә башлаһам, эштәремде эшләп өлгөрә алмаҫ инем. Әлеге ваҡытта музейҙа директор, "Сәләм" телеканалында ярты ставкаға баш мөхәррир булып эшләйем. Шул уҡ ваҡытта һаман да фильмдар төшөрөүҙән туҡтағаным юҡ.

**Нияз Абдулхаҡ улы менән бик күп тапҡырҙар осрашып, гәзиткә мәҡәләләр эшләргә тура килде. Ул һәр ваҡыт бер мәсьәлә буйынса борсолоуын белдерә торғайны. Ул да булһа, урта быуат тарихсылары, Меркатор һәм башҡалар үҙҙәренең карталарында өс йылға (Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим) киҫешкән урында Башҡорт тигән ҡаланың булыуын иҫбатлаған саҡта, был фактты хәҙерге Рәсәй, донъя ғалимдары таныған саҡта тик үҙебеҙҙең республика йәмәғәтселеге, улай ғына ла түгел, Башҡортостан ғалимдарының быны ҡабул итмәүе. Хәҙер был фекер үҙгәрҙеме, үҙгәрмәһә, сәбәптәре нимәлә? Ә бына Ҡаҙандың мең йыллығын иҫбат итеү өсөн бер тәңкә лә еткән, тиҙәр.**

- Был фекер үҙгәрмәне. Мин һинең был һорауыңа яуап та бирә алмайым. Нияз Абдулхаҡ улы менән аралашып, уның Башҡорт ҡалаһы хаҡындағы фекерҙәрен тыңлап өлгөрҙөм. Ул был хаҡта тыныс ҡына һөйләй алмай торғайны, һикереп-һикереп, дәртләнеп-дәртләнеп бәйән итер ине. Минең хыялым бар. Интернетта таралған Меркатор картаһының, Каталон атласының төп нөхсәләрен барып табып, төп нөхсәләге Башҡорт ҡалаһын видеоға төшөрөп алып ҡайтыу һәм халыҡҡа еткереү. Ҡыҙласов, Баталов, Атила Тюрк, Зәйнулла Самашев һәм башҡа ғалимдар раҫлауынса ла, Өфө-II - ул боронғо Башҡорт ҡалаһы. Был мәсьәләлә уларҙың береһенең дә шиге юҡ. Беҙгә хәҙер шуны кире ҡаҡҡыһыҙ итеп раҫларға ғына кәрәк. Бөгөн беҙҙең музей фондында 8 меңдән ашыу артефакт иҫәпләнә, фондты тулыландырыу эшенә бер 2 йыл элек ныҡлап тотондоҡ. Уларҙың һәр ҡайһыһы Өфө урынында боронғо ҡаласыҡтың булыуын раҫлай.

**Сер булмаһа, әлегә күрһәтелеп өлгөрмәгән ниндәй фильмдарың менән киләсәктә беҙҙе ҡыуандырырға уйлайһың?**

- Яңыраҡ ҡына Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың 90 йәшлек юбилейына арналған 50 минутлыҡ фильм төшөрөп бөттөк. Беҙ уны бер йыл буйы төшөрҙөк. Уға тиклем уның тураһындағы 8 фильмды ҡарап сыҡтым. Сценарий яҙғанда үҙемә шундай маҡсат ҡуйҙым: башҡаларҙы ғына түгел, үҙ-үҙенде ҡабатламаҫҡа. Ноғман Мусин һымаҡ шәхес хаҡында фильм төшөрөргә тотоноу өсөн, Айҙар Хөсәйенов минең хаҡта яҙғанса, "дерзкая" булырға кәрәктер ул. Беҙ Назар Нәжми хаҡында "Ялҡындан һәм хистән ҡойолған" тигән фильм эшләгәйнек. Шуны февралдә күрһәттек. Йәй көнө Ноғман ағай миңә үҙе шылтыратты. Шундай шәхес үҙе миңә шылтыратһын әле, ултырған ерҙән һикереп торҙом. Уның китаптарын, "Мәңгелек урман"ы менән "Һайлап алған яҙмыш"ын илай-илай уҡыған кешеләр беҙ. Иң һыҙғанып яңы фильмға тотондоҡ. Тыуған яғына ла барҙыҡ. Фильмдың исемен "Һайлап алған яҙмыш" тип атаным. Тормош Ноғман ағайҙы бик күп ваҡыт ауыр һайлауҙар алдына ҡуйған. Мин уның ниндәй юлды нисек һайлауына баҫым яһаным. Мин үҙем дә белмәй инем, уны 4 тапҡыр Салауат Юлаев премияһына тәҡдим итеп, һуңғыһында ла бирмәҫкә булғастар, комиссия ағзаларынан бер ағай тороп: "Һеҙгә оят түгелме, Ноғман Мусинға ла Салауат премияһын бирмәгәс, кем уға лайыҡ?" - тип әйткән. Шунан һуң бер премияны Ноғман ағайға һәм икенсе кешегә бүлеп бирәләр. Ноғман ағай, әлбиттә, тәүҙә шатлана, әммә ҡыпсаҡ ырыуы кешеһенең холҡо текә бит инде, премияны алырға бармай. Премияны ул ваҡытта мәҙәниәт министры булып эшләгән Тәлғәт Сәғитов Ишембайҙа ниндәйҙер бер тантанала Ноғман Мусиндың сәхнәгә сыҡҡан ваҡытын файҙаланып тапшыра. Ноғман ағай менән күпме аралашһам да, уның ауыҙынан зарланыу һүҙен ишеткәнем булманы. Ноғман ағайҙың ныҡлығы имәндәрҙән, мәңгелек урмандан килә.

**Тағы ла ниндәйерәк ижади пландарың бар?**

- Берәр тема йә кеше менән ҡыҙыҡһына башлаһам, ауырлы ҡатын һымаҡмын. Салауат Щербаков тураһында мәғлүмәт уҡығандан һуң шулай килеп сыҡты. Уның тураһында мәғлүмәт уҡығас, фильмға тотоноромдо аңланым. Ул Рәсәйҙә генә түгел, донъяла билдәле скульпторҙарҙың береһе. Уның Мәскәүҙә генә 40 һәйкәле ҡуйылған, шуларҙың өсөһө Ҡыҙыл Майҙан янында. Мәскәүгә әлеге лә баяғы операторҙар Урал Ғатауллин, Илгиз Нисипов менән командировкаға барып, бер аҙна буйына фильмға кадрҙар төшөрҙөк. Уның иҫ китмәле ябай, белемле, эшсәнлегенә хайран ҡалдыҡ. Ул үҙен "йәш башҡорт" тип атай. Уның үҙ тарихы, тамырҙары менән ҡыҙыҡһына башлауы ғәжәйеп. Ул хәҙер тормошондағы бөтә нәмәне башҡорт кешеһе позицияһынан сығып баһалай. Мәскәү буйлап машинала китеп барабыҙ, Салауат ағай руль артында, камералар эшләй. Мин унан: "Салауат ағай, нишләп шәп бараһығыҙ, тиҙлек яратаһығыҙмы?" - тип һорайым. Ә ул: "Ниндәй башҡорт тиҙлек яратмай һуң?" - тип һорауыма һорау менән яуаплай. Ул эсендәгеһе тышында булған бик ҡыҙыҡлы кеше. Минең ҡарамаҡҡа Рәсәйҙә ике бөйөк скульптор бар. Береһе - Зураб Церетели, икенсеһе - Салауат Щербаков. Церетели беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы. Уларҙың аралашыуына хайран ҡалдым. Кеше ни тиклем бөйөк булһа, шул тиклем ябай икән. Интервью бирергә күп билдәле шәхестәр ризалашты - Владимир Мединский, Рәшит Нурғәлиев, Василий Нестеренко һәм башҡалар. Улар Щербаков тураһында шул тиклем матур һүҙҙәр әйтте. Былар барыһы ла, тағы ла Салауат ағайҙың нисек итеп башҡортса һөйләшә башлауы ла фильмда бар. "Минең исемем Салауат", "Мин башҡорт халҡының улымын" тигән һүҙҙәрҙе ул үҙе әйтә. Фильмдың исеме "Минең исемем Салауат". Алдағы йыл башына тыуған көнөнә өлгөртһәк, шәп булыр ине.

**Гәүһәр, мин һинең тағы бер мәленде - телевидениела тәүләп эшләй башлаған сағыңды яҡшы хәтерләйем. Уран ағай Кинйәбулатов менән үҫмерҙәр өсөн тапшырыуҙар эшләй торғайныгыҙ. Ул ваҡытта барыбыҙ ҙа романтик инек. Хәҙерге көн күҙлегенән үткәнеңә ниндәй баһа бирәһең: был һинең һайлап алған яҙмышыңмы?**

- Әлбиттә, һайлап алған яҙмышым. Уның башҡаса булыуы мөмкин түгел ине. Әле эшләнмәгән эштәрем дә шул тиклем күп. Беренсенән, Өфө-II ҡаласығының музей комплексын төҙөү, икенсенән, уның боронғолоғон иҫбат итеү өсөн Францияға барып фильм төшөрөү. Карталарҙың һаҡланыуын да, унда барыу күпмегә төшәсәген дә белештем.

Шүлгәнташ мәмерйәһе тураһында ла Европалағы шуға оҡшаш мәмерйәләр менән сағыштырып фильм эшләгем килә. Бәлки, был мәмерйәләрҙәге һүрәттәр йыһан менән бәйлелер. Башымда фекерем үҫә, әммә үҫешеп етмәгән. Әлегә ул фекер менән ауырлы була башланым ғына.

**Һин үҙ алдыңа ҡуйған барлыҡ маҡсаттарыңа барып етә алырмын тип ышанаһыңмы?**

- Һис шикһеҙ. Мин үҙемдең улыма ла быны өйрәтәм. Айбәк улыма 23 йәш. Мәскәүҙә идарасыға уҡып йөрөй, бакалаврҙы бында тамамланы. Ул бәләкәйҙән граффити менән шөғөлләнде. Башҡорт тормошона ҡарата ҡыҙыҡһыныуы булманы. Минең тәрбиәмде ишетмәнеме икән, тип уйлана башланым. Атайым вафат булғандан алып, әсәйем беҙҙә йәшәй. Шулай ҙа ҡартнәһе менән улым башҡортса һөйләшә. Бер ваҡыт эштән ҡайтһам, был "Урал" йырын тыңлап ултыра. Ҡулында "Урал батыр" эпосы, шуны уҡый. Шунда бер нәмәне аңланым: балаға һалынған тәрбиә, тел, моң бер ҡайҙа ла юғалмай икән. Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты. Юғары уҡыу йортона уҡырға ингәс, ул башҡорт тарихы менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланы. Башҡорт халыҡ әкиәттәрен әллә нисә тапҡыр уҡып сыҡты. Улар буйынса миңә һорауҙар бирә. "Башҡортомдоң йөҙ йыры" тигән китаптағы барлыҡ йырҙарҙы тыңлап сыҡты. Мәскәүҙә бергә уҡыған һабаҡташтарына ла тыңлата, башҡорт тарихын уларға ла һөйләй. Уның Мәскәүҙәге иптәштәре өсөн Башҡортостандан да яҡшыраҡ урын юҡ. Рәми Ғариповтың улы Азамат менән дә дуҫтар. Бала сағында һынлы сәнғәт мәктәбендә уҡытҡайны уны Азамат Рәми улы. Уның аша Рәми Ғариповтың ижадына ла ҡыҙыҡһыныуы барлыҡҡа килде. Улым миңә ҡарағанда яҡшыраҡ, ҡыҙыҡлыраҡ итеп һөйләй. Хәҙерге йәштәрҙең хыялдары беҙҙекенән бөтөнләй айырыла. Уларҙа беҙҙәге һымаҡ комплекс юҡ, масштаблы уйлайҙар һәм бер нәмәнән дә ҡурҡмайҙар. Улар икенсе замана башҡорттары.

**Ихлас әңгәмәң өсөн оло рәхмәт, Гәүһәр. Барлыҡ маҡсаттарыңа барып етергә, хыялдарыңды тормошҡа ашырырға Хоҙай насип итһен! Тиҙҙән һиңә ике 5-ле туласаҡ. Уларҙы хеҙмәтең өсөн халҡыбыҙҙың, Хоҙай Тәғәләнең оло рәхмәте итеп ҡабул ит, иҫән-һау бул!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ **_Амулет, талисман, бетеү һәм төрлө биҙәүестәр рәүешендә ҡулланылған аҫылташтар уның хужаһын күҙ тейеүҙән, ҡарғыш алыуҙан, ғөмүмән, ҡара көстәрҙән һаҡлай._**





# КЕШЕЛЕКТЕҢ...

## иң боронғо юлдашы ул таштар



**Тау-таш араһында йәшәгән Бөрйән халҡы ташҡа шул тиклем күнеккән, көндәлек тормошта, көнкүрештә уның барлығына хатта иғтибар ҙа итмәй. Ситтән килгәндәр, ҡаяташтарыбыҙҙы беренсе тапҡыр күреп, һоҡлана һәм аптырайа, беҙ уларҙың аптырағанына аптырайбыҙ кеүек.**

Боронғораҡ өйҙәрҙең йоҡа тигеҙ таштарҙы ҡатлап, балсыҡ менән нығытҡан нигеҙеме, шаҡлап торған йомроҡас мунса таштары тиһеңме, ишек алдарына түшәлгән өҫтәлдәй тигеҙ тәбиғи ялпаҡтарымы, түңәрәк тирмән ташымы, һанай китһәң, ниндәйе генә юҡ уларҙың! Бала саҡта уйнап үҫкән "бишташ", "ҡырҡташ"тарҙың төҫтәре, шымалығы әле лә иҫтә. Малайҙарҙың, нисә кәләш алырын юрап, ҡоймаҡ таштарҙы һыу өҫтөнән кәйелткәнен ҡыҙҙар ҙа, ситтән генә ҡарап тормай, ҡушылып китә инек. Ярыш сәме ҡайнап тора инде был уйындарҙа! Енеү-еңелеү - барыһы ла үҙеңдең булмышыңдан, тырышлығыңдан. Эргәлә ҡарауылсы ололар юҡ! Йәйҙең йәй буйына өшөп-күгәренгәнсе һыу ингәндә, ҡояшта ҡыҙған йәйпәк таштар өҫтөндә күпме аунағанбыҙҙыр! Шул сәбәпле, донъябыҙҙы онотоп китеп, ваҡытында эҙләп алып, бикләргә өлгөрмәгән быҙауҙар көтөүҙән ҡайтҡан һыйырға ҡушылһа, сыбыҡ та аҙ эләкмәгәндер беҙгә. "Иҫһеҙ булып" һыу инеүҙәр дәүерендә ҡолаҡҡа нисә тапҡыр һыу инде икән? Хәҙергеләр кеүек, бәлә һалып өйгә ҡайтыу, ата-әсәйгә ошаҡлап йәлләтеү башҡа ла инеп сыҡмай әле ул. Врачҡа күренеү тигән нәмәне белмәйбеҙ ҙә! Матур ғына аҡһылдарын эҙләй һалып алып, ике ташты ташҡа сәңкетеп һуғабыҙ ҡолаҡ төбөндә. Өҫтәүенә, һамаҡлап та өлгөрәр кәрәк: "Аҡ таш, ҡара таш, ҡолағымды яра таш!" Башты һыу ингән ҡолаҡ яғына иңкәйтәһең, әммә кәүҙә тура, шул яғындағы һыңар аяҡта тороп, һикерәндәйһең... Күпме сослоҡ, таһыллыҡ, сабырлыҡ талап итеlә бер башыңа! Уның ҡарауы, бер аҙҙан ҡолаҡтан йылы булып һыу ағып китә лә, ҡотолдоң бер бәләнән!

Әкиәт һөйләүсе оололарҙың: "Боронборон заманда йәшәгән ти әбей менән бабай. Уларҙың өйө булған ти таштан... Һөйләйемме баштан?" - тип һемәйтеүҙәрен дә иҫләгән быуын әле беҙ. Кешенең тәү торлағы таш мәмерйәләрҙә булыуы тураһында мәғлүмәт һаҡланған бит ошо ябай ғына һүҙ буткаһында! Бар донъяға билдәле булған Шүлгәнташыбыҙҙың да исеме тыйыулы булғандыр тим, сөнки ул урындағы халыҡ телендә Ташөй тип йөрөтөлә ине. Ысынлап та, тарихта эш һәм һунар ҡоралдары ла таштан яһалған дәүер булыуы һәм уның шартлы рәүештә таш быуат тип аталыуы һәр кемгә мәғлүм. Таштар - Ер шарын йәшәү урыны иткән кешелектең иң боронғо юлдашы, тигән фекергә яҡларға була. Ер йөҙөндәге барса халыҡтар ҙа таштың миллионлаған йылдар самаһы планетаның хәтерен һәм Йыһан көрен туплаған мөғжизә икәнен яшана.

Башҡорт халҡында ла таштар тураһында ярайһы уҡ мәғлүмәт тупланған. Беҙҙән заманға тиклем таш әйберҙәр генә түгел, хатта ташҡа бәйле ғөрөф-ғәҙәттәр, уйын төрҙәре, дауалау алымдары быуындан-быуынға күсеп килеп етеүе ошоға дәлил.

Традицион булмаған дауалау алымдарынан һаналған таш менән дауалау "литотерапия" тип атала икән һәм был термин боронғо грек телендә дауалау тигәнде аңлата. Минералдан таралған нурланыш һәм тулҡынланыш кешенең төрлө ағзаларына тәьсир итеү көсө менән бәйле был алым Көнсығыш, Азия илдәрендә киң таралған. Халыҡ табиптары таштарҙың энергетик балансты көйләүен, йәғни таш менән кешенең үҙ-ара мөнәсәбәттә була алыуын күҙ уңында тота. Рәсми медицина ла литотерапияның организм өсөн тышҡы файҙаһын, йәғни эҫе таш менән йылытыу ҡан тамырҙарының киңәйеүенә һәм нервыларҙың тынысланыуына булышлыҡ итеүен таный. Һыуыҡ таштар ярҙамында, киреһенсә, тәндең билдәле бер өлөшө һыуытыла, һуңынан шул урындағы ҡан әйләнешен көсәйтеп, уны кислород менән туйындырып, токсин һәм шлактарҙы сығаралар.

### Дауалаусы таштарҙы төркөмләү

Кристалдар энергетикаһы буйынса төркөмдәргә бүленә. Бының өсөн шарт булып уларҙың ҡайҙа һәм нисек барлыҡҡа килеүе иҫәпкә алына: вулкан урғылыуҙанмы, диңгеҙ төбөнәнме, әллә ултырған тау тоҡомдарынанмы? Ошо талаптан сығып, минералогик-энергетик шкала төҙөлгән:

- Энергетик яҡтан иң көслө минералдар тип алмаз, александрит, зөбәржәт (изумруд), рубин, сапфир һанала. Был бишәүҙән һуң ошо төркөмгә аквамарин, аметист, гранат, селенит, турмалин, хризолит та өҫтәлә.
- Агат, малахит, родохрозит, алһыу кварц, сердолик, халцедон энергетик яҡтан уртаса кимәлдәге таштар рәтендә йөрөй.
- Уларҙан ҡала опал һәм обсидиан да исемлеккә индерелгән.
- Органик рәүештә барлыҡҡа килгән гәүһәр (янтарь), мәрйен (коралл), ынйы (жемчуг), гагат, шунгит айырым төркөм итеп ҡабул ителгән.

### Рәсми танылған дауалаусы минералдар

Литотерапияны шарлатанлыҡ тип һанаған рәсми медицина ҡайһы бер тәбиғи минералдарҙың организмға ыңғай тәьсирен таный: һүҙ тоҙ тураһында. Ашарға яраҡлы таш тоҙо, ысынлап та, дауалаусы сифаттары менән билдәле:

- тоҙ тәбиғи антисептик һәм консервант;
- тоҙ иретелгән һыу йоғошло ауырыуҙар көсәйгән осорҙа ауыҙ ҡыуышлығын, тамаҡ, танау эсен сайҡатыу өсөн ҡулланыла;
- һыҙлаған урынға ҡыҙҙырылған тоҙ тултырылған тоҡсай баҫыла;
- ҡаты тоҙ иретмәһендә һыуға аяҡ һәм ҡулдарҙы тығып ултырып, кире энергиянан һәм тырнаҡтарҙағы йоғошло бәшмәк ауырыуынан арынырға була;
- тоҙло ванна - нервы ҡуҙғыуын, арыуҙы баҫыусы релаксант, тирене таҙартыусы һәм йомшартыусы сара;
- ҡоро тоҙ менән тирене ышҡып, уны ҡартайған һәм үле күҙәнәктәрҙән таҙарталар.

Ошо урында спелеотерапия тигән атама аҫтында литотерапияның үҙаллы тармағын да иҫкә алырға була. Ер аҫтындағы тоҙ ҡатламын сығарыуҙан бушап ҡалған ҡыуышлыҡтарҙа махсус төҙөлгән мәмерйәлә үҙемә лә булырға тура килде. Ундағы тәбиғи рәүештә йодҡа бай һәм һәр төрлө микробтарҙан азат һауаны һулап, астма һәм тын алышына бәйле башҡа сирҙәр дауалана.

### Таш менән дауалау алымдары

Таш үҙенең энергияһын кеше менән уртаҡлашырға һәләтле тигән инаныуҙан сығып, уларҙы төрлөсә ҡулланып була:

- Амулет, талисман, бетеү һәм төрлө биҙәүестәр рәүешендә ҡулланылған аҫылташтар уның хужаһын күҙ тейеүҙән, ҡарғыш алыуҙан, ғөмүмән, ҡара көстәрҙән һаҡлай, тигән ҡараш беҙҙең халыҡта төплө урын алған. Ҡашмауыбыҙҙы һәм башҡа төрлө баш һәм өҫ кейемдәрен алайыҡмы; муйынға таға торған һәм түште ҡаплаған алмиҙеү, хәситә һ.б. атайыҡмы; беләҙек, йөҙөк, билбау булһынмы - барыһы ла ошо талапҡа тап килгән. Шуға күрә улар борондан, быуындан-быуынға күсә килгән матди һәм рухи байлығыбыҙ беҙҙең!
- Таштың көсөн һыуға биреү. Бында бигерәк тә өшкөртөлгән тоҙ менән дауалау бик киң таралған алым. Һыуҙы көсәйтеүсе иң шәп минерал - саҡматаш һанала. Уны кис көнө стакандағы һыуға һалып ҡуйып, иртән шул һыуҙы эсеп ҡуялар.
- Таштың онтағын ҡулланыу (порошок). Ҡырҡылған яраға, иҙелгән сей тирегә, утҡа бешкән урынға әсеүташты ваҡлап, шуның онтағын һибеү беҙ бала саҡта ла киң таралған күренеш ине әле.
- Һыҙлаған ергә йылытылған таш ҡуйыу. Ошо алым тураһында айырым яҙып үткем килә. Сөнки үҙем уның файҙаһын күп күрҙем.

### Халыҡ хәтерендә ҡалғандар

Белеүегеҙсә, ҡалаларҙа май айында үҙәк йылытыу системаһы һүндерелгәндә, йә сентябрь айында әле ул тоҡандырылмаған мәлдәрҙә, көн торошо үҙгәреп китеп, һыуыҡтар башланһа, фатирҙарҙа бик һалҡын була. Быуын һыҙлауҙарына дусар булғандар һәм оло йәштәгеләргә был осорҙо үткәреү бик ҡыйынға төшә. Бер мәл шулай, Мәскәүҙә тибет медицинаһы буйынса уҡып йөрөгән улым шылтыратып, хәлемде һорағанда, мин шундай хәлдә ултыра инем. Ул миңә тиҙ арала аҡ төҫтәге ялпаҡ йылға таштары эҙләп табырға һәм уларҙы сәғәткә яҡын һыуҙа ҡайнатып, төнгөләккә йоҡларға ятҡанда шуларҙың өҫтөнә ятырға кәңәш бирҙе. Ялпаҡ аҡ таштарҙы табыуы бик анһат түгеллеген шунда белдем инде! Шулай ҙа Бөрйән йылғаларынан Стәрлетамаҡтағы фатирыма йыйып алып ҡайтҡан аҡһылыраҡ төҫлө 6-7 таштың файҙаһын күрҙем мин яҙлы-көҙлө. Нимәһе ҡыҙыҡ: түшәккә ятҡас, тән үҙенәнүҙе кәрәк урындарға шылдырып ала ул әҫәкәй таштарҙы, шуның йылыһына баҫылып йоҡлап та кителә. Улар менән яҙлы-көҙлө аяҡ-быуындар һыҙлауынан ҡотолғаныма шөкөр итәм. Ауылда йылы өйҙә йәшәһәм дә, хәҙер ҙә был набаҡты ҡулланам, йылғанан йыйған таштарым һәр саҡ өйҙә һаҡта яталар. Был таштар бөтөн, шыма, матур булырға тейеш.

**Ошо шәхсән тәжрибәмдән сығып, ғүмер баҡый тау-таш араһында йәшәп ятҡан бөрйәндәрҙә таш менән дауалау серҙәренең, алымдарының остого булһа ла һаҡланғандыр, тигән өмөттән, ағинәйҙәр менән онлайн-әңгәмә ойоштороп алдым:**

***Айһылыу Ғарифуллина:*** "Өләсәйемдең аҡ бер төймә һымаҡ нәмәһе бар ине. Ысын һиҙеп, ти ине. Алты йәшем тулмаҫ борон мин, ҡаралды башында тызынып ятып, стена егендәге мүк араһындағы ҡарағай сәнскәге күҙгә ҡаҙалды. Шуны оололарға әйтмәй йөрөп, күҙемә аҡ һалды. Өләсәй, бысаҡ аҫтына һалмайныгыҙ баланы, тип, үҙенсә тәрбиәләне. Аҡһыл-зәңгәрһыуыраҡ төҫтәге таш булдымы, төймәме (усҡа һыймалы, оҙонсай), шуны бысаҡ менән ҡырып, минең күҙгә һала ине. Ул шулай кеше дауаланы..."

***Артабан Айһылыуҙың бер туған апаһы, Байназар ауылы ағинәйе Фәнүзә Ишбаева был мәғлүмәтте ентекләберәк һөйләне:*** "Беҙҙең, үткән быуаттың 40-70-се йылдарындағы яланаяҡлы, "ағасаяҡ" бала-сағаларының, аяҡ табандары, тиктормаҫ ҡулдары һыҙылып-яраланып, сиҡандап ҡына бара торғайны. Күпме ауыртһа ла, һыҙлаһа ла, танау мыршылдатып, күҙ сепелдәтеп, ата-әсәйҙәргә әллә ни биҙунданмаҡ. Ҡүкһел төҫтәге аҡбур һымаҡыраҡ был ташты өләсәйем йә әсәйем хәҙерге бер литрлыҡ банка ҙурлыҡ килелә төйөп, он-онтаҡ итеп алыр ине. Беҙ ни, мөйөштәге кәштәлә ултырған бормасанан, унда бөтөп китһә, келәттә теҙелешеп китеп, элеүле торған янсыҡ ҙурлыҡ тоҡсайҙарҙың тышынан ошо онтаҡты табып, яраға һибеп алабыҙ. Ике-өстө һипһәң, яраңды ла онотаһың. Ятыр алдынан яраны, һыҙырылған-сыйылған ерҙәрҙе шул онтаҡ иҙелгән һыу менән йыуып-сайып һалырҙар ине. Тиҙ кипһен-ҡатһын тип, яраны ураманылар ҙа.

**(Дауамы 12-се биттә).**

**✓ Әсәйем, сөскөрөп-бышҡырып ауырыша башлаһаҡ та, бер генә дауа ҡулланды. Йоморо аҡташтарын ут өҫтөндәге өсаяҡҡа ҡуя ла, эргәһенә беҙҙе ултырта. Эҫе таштарға һибелгән мәтрүшкәле һыуҙан хасил булған хуш еҫле быуҙы һулайбыҙ.**



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛА ҠУЛДАРЫ...

## китап тотоп әүҙемләшә

■ Бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үҫешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тотторорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға яҡшы массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптарын да белгестәр юғары баһалай. Былар барыһы ла баланы киләсәктә китап уҡырға яратырға ла күнектерәсәк.

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций һәм калий күп, улар артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

■ Ас көйөнә мөһим ҡарар ҡабул итмәгеҙ, ти Макс Планка институты ғалимдары. Асығыу тойғоһо кешене уйланылмаған ҡабалан аҙымдарға этәреүе ихтимал. Баҡтиһәң, ашҡаҙан буш ваҡытта ҡарар ҡабул итеүгә баш мейеһенең бөтөнләй икенсе өлөшө яуап бирә икән. Ғалимдар емешеләк себенендә тәжрибә үткәреп ҡараған һәм уның ас ваҡытта хәүефкә барыу механизмы нисек эшләүен асыҡлаған. Ваҡ себендәр инстинктив рәүештә углекислый газдан ҡурҡа, әммә асыҡҡан мәлдәрендә улар газға ҡарамайынса аҙыҡҡа яҡынлаша. Ғалимдар фекеренсә, был нервы системаһының ике өлөшөнөң компромисы һөҙөмтәһе, бындай компромисҡа кешенең нервы системаһы ла һәләтле.

■ Калифорния тикшеренеүселәре хатта көслө һыҙланыуҙарҙы дауалау өсөн тәбиғи саралар тапҡан. Күп тикшенереүҙәр күрһәтеүенсә, хохлатка тигән үлән ауыртыуҙы баҫыу һәләтенә эйә икән. Уның составындағы үҙенсәлекле матдә дегидрокорибульбин кешенең эмоциональ торошо өсөн яуап биреүсе нейрондар әүҙемлегенә йоғонто яһай ала. Был матдәгә организм өйрәнмәй, шуға ла уны киләсәктә медицинала ҡулланырға уйлайҙар. Был үҫемлек ҡытай халыҡ медицинаһында йыш ҡулланыла. Ул кешеләрҙе лә, хайуандарҙы ла дауалай.

■ Баланың ғаиләлә нисәнсе булып тыуыуы уның интеллектына йоғонто яһай, имеш. Голландияла был йәһәттән күп тикшеренеүҙәр үткәрелгән һәм ғалимдар бала ни тиклем өлкәнерәк була, уның интеллекты бәләкәс ҡустылары һәм һеңлеләре менән сағыштырғанда 18 йәшкә тиклем юғарыраҡ була икән. Әммә ғаиләләге өлкән балалар һимереү, аллергия менән йышыраҡ ауырый. Уртансы балалар һирәгерәк алдаша, улар фантазияға бирелеп бармай. Улар шулай икенсе яртыларына тоғроraҡ була. Өлкән балалар ныҡлы сәләмәтлектәре менән һәм хис-тойғоға артыҡ бирелеп бармауҙары менән айырылып тора.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# КЕШЕЛЕКТЕҢ...

## иң боронғо юлдашы ул таштар

**(Башы 11-се биттә).**

Ауыҙ эсе, тел-урт иҙелһә, әсеүташты имеп, йә тел аҫтына һалып йөрөгәндәр. Онтағын һыуға болғап, шуның менән ауыҙҙы сайҡатҡандар. Оло юлдан Яуымбайҙы үтеп, Дүртсүмәлеһен менгәс, Әсеү яланы башлана. Уңдан төптә, үрҙәрәк, ҡасандыр Мәһәҙейҙәрҙең йәйләгән ере башлана, Мәһәҙей Әсеүе атамаһы менән йөрөй. Йылға яндап һуҙылған тау әсеүташҡа бай булған. Ярға яҡыныраҡ ерҙәрҙә, яуындан һуң да таш иҙелеп, ҡойобатҡаҡҡа әйләнеп, әсеп-күпсеп ятҡан. Ана шул батҡаҡ менән сей яраны, ҡутыр-фәләнде дауалағандар. Хәҙергесә әйтһәк, дезинфекциялай торған антисептик булған инде.

Тағы бер нәмә иҫкә төштө: бәғзе берәүҙе теше һыҙлап ыҙалата бит. Беҙ ҙә мәхрүм булманыҡ ул һыҙлауҙан. Иҙел ташы булдымы, махсус берәй ташмы, беҙ мунса ташы тинек, бармаҡ башы ҙурлыҡ биш-алты бөртөгөн ҡыҙҙыра ла, һауытҡа һалып, өҫтөнә һыу ҡойоп, бөркәндереп, боҫона ауыҙҙы асып ултыраһың. Ҡорто төшә, ти торғайны өләсәйем. Мунсаның ташына эҫе һалып, боҫона арҡа терәп тороуҙың ни тиклем шифалы икәнен күптәр аңламай әле. Шул боҫта миндекте тота биреп, сабынып та ебәрһәң... Мунса - ул беҙҙең дауахана, ти торғайны атайым да. Мунса мейесенә Иҙел һыуы йыуған таштарҙы һалалар. Мәһәҙей ауылына килен булып төшөп, таштай батып, күркәм ғүмер юлы үткән 1901 йылғы Ғарифуллина Мәрзиә өләсәйем, 1930 йылғы әсәйем Ғарифуллина Нәбирәнән бик фәһемле һабаҡтар - кәрәкле ғилем алғанмын икән тип шатланам хәҙер..."

***Дилбәр Ғәлиева:*** "Минең өләсәй Исмәғилова Хәбирә Фәтих ҡыҙы ла дауалаған таш менән. Үҙем бәләкәй саҡта, иҫләйем, уның өйөндә ҡыҙылса менән ауырыған балаларҙы, өҫтәренә ҡыҙыл сепрәк ҡаплап, теҙеп һалып ҡуйҙылар. Өләсәйем уларҙы матур ғына һандығында һаҡлап тотҡан ташы менән һыпырып, өшкөрә. Мине лә, тегеләр менән бер юлы үткәрһен ауырыуҙы, типтер инде, бергә һалып ҡуялар. Ғаиләбеҙ ҙур, 11 бала. Интернатта ятып уҡыусылар бөтәһе лә свинка менән ауырып ҡайтҡан бер мәл. Ул саҡта ла өләсәй, апайымдарҙы ултыртып, ташы менән йөрөтөп өшкөргән, һәм теге свинка нисек сыҡҡан, шулай юҡ булған. Ангинаны ла шулай дауалаған. Ике өләсәйҙең дә дауалай торған һәләттәре булған. Беҙ генә бер нәмә лә белмәйбеҙ...

Эйе, ул йылдарҙа дин, халыҡ ысулдары менән дауалау тыйылған мәлдә үҫкәнгә күрә, өләсәйҙәребеҙҙең тормош тәжрибәһенә, халыҡ хәтеренә битараф итеп тәрбиәләнгән быуын балалары инек шул беҙ. Апайым Фәриҙә иҫләүенсә, таштың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Өләсәйебеҙ әхирәт донъяһына күскән саҡта әсәйебеҙҙең бер туған һеңлеһе, Әбйәлил районы Гусевка ауылында йәшәүсе Гөлсирә апай ташты һандығы-ние менән ҡуша алып ҡайтып киткән. Апай мәрхүмә булғанда был яҡтағы туғандарына уны ерләшергә барыу мөмкинлеге булмаған. Тимәк, таш-ҡомартҡы шулай юҡҡа сыҡҡан".

***Артабан һүҙ тотҡаһы Яңы Монасип ауылы ағинәйе Нәсимә Сәғитоваға күсте:*** "Тишек ташты бәләкәйерәк һауыттарға, ризыҡ кәмемәһен, тип бәйләп ҡуйғандарын беләм. Ҡәйнәмдеке була торғайны. Ҡәйнәм Сәғитова Ғәйниямал Ишбулды ҡыҙы 1915 йылғы, 1996 йылда үлеп ҡалды. Мин килен булып килгәндә уның ике ағас һауыты - күнәсектәре, сәсенә таҡҡан үрместәре бар ине. Ҙурыраҡ күнәсегенә нимә һалып йөрөткәндер, ә бына бәләкәйерәгенә тоҙ һалып тотоноп йөрөй ине. Ул күнәсектәрҙең ике яҡ ситенән бау тағa торған тишектәре була торғайны, моғайын, күргәнегеҙ булғандыр. Шул тишектәрҙен береһендә таш бәйле торғанын күргәс, мин унан һорай ҡалдым. Шунда әйтте инде, һауыттан ризыҡ өҙөлмәһен өсөн, тип. Йәш саҡта ней, ундай-бындайға иғтибар итмәнек бит инде. Ҡыбырлап, шундай нәмәләрҙе йыя, ҡыҙыҡһына башлағайным, ололар ҙа китеп бөттөләр. Ул тишек ташты кеше Иҙел, башҡа йылға буйҙарынан үҙе тапҡанын бәйләп ҡуйырға тейеш. Яланда табылғаны яраймы микән ҡулланырға, уныһын белмәйем. Ҡот, ырыҫ, бәрәкәт килтерә торған таш, тип ышанғандарҙыр инде... Миңә тап булғаны юҡ бындай таш..."

***Брәтәк ауылы ағинәйе Фәнүзә Ғаян ҡыҙы ла мәғлүмәтле булып сыҡты был турала:*** "Инәйҙәр һөйләй торғайны. Тишек таш аша хәмерҙе ағыҙып эсерһәң, эскән кеше эсеүен ташлай, тип. Уның ниндәйҙер доғаһы ла бар шикелле. Мин бәләкәй саҡта ишеткәнемдә генә яҙам. Мин дә ул тишек ташты эҙләп- эҙләп, таба алманым инде..."

***Ҡотан ауылында йәшәүсе 1957 йылғы Ғәлина Фәрзәнә Мотаһар ҡыҙында табылды ул "тишек таштар". "Мин уларҙы эҙләмәйем дә. Үҙҙәре тап булалар улар миңә", - тип таштарын бер өйөр итеп килтереп күрһәтте ул. Фотолағы таштар уныҡы. Хәтирәләре менән дә ихлас уртаҡлашты:*** "Аҫалы балаҫтар һуғыу оҫтаһы булған әсәйем Кәримәнең бер генә шыма "тишек ташы" булды. Уны ул өйҙөң ҡото, тип ишек башында һаҡланы. Яңғыҙы ике ҡыҙ баланы тәрбиәләгән әсәйем, сөскөрөп-бышҡырып ауырыша башлаһаҡ та, бер генә дауа ҡулланды. Иҙел буйынан йыйып алған йоморо аҡташтарын биҙрә төбөнә һала һалып, биҙрәне ут өҫтөндәге өсаяҡҡа ҡуя ла, таштар ҡыҙыу менән эргәһенә беҙҙе юрған менән бөркәндереп ултырта. Эҫе таштарға һибелгән мәтрүшкәле һыуҙан хасил булған хуш еҫле быуҙы һулайбыҙ. Тәүҙә ҡырҙаныраҡ, таштар һыуына башлаһа, биҙрәгә яҡыныраҡ күсәбеҙ. Тирләп-бешеп сыҡһаҡ, башыбыҙға яулыҡ урап, йылы юрған менән баҫырып йоҡларға һала ине. Иртән тороуға һау-сәләмәтбеҙ!"

***Ҡотан ауылының Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Хәмдиә Һаҙый ҡыҙы Ситдиҡова үҙе лә хәтер яңыртты:*** "Атайыбыҙ йәшләй үлеп, алты бала менән ҡалған әсәйем ферма эшенән бушаманы. Резина итектәр менән йөрөп һыуыҡ үткәргән аяҡтарын, эҫе йәйгә сыҡҡас, Иҙел буйына барып, эре генә ҡырсынлы ҡом өҫтөнә ултырып дауалар ине. Бер аҙҙан аяҡтарын ҡомға күмеп, доғалар уҡып: "Һыҙлауҙарым, ҡомташ булып ҡойолоп ҡына ҡалһағыҙсы!" - тип теләктәр теләйтеләй, аяҡтарын һыуға тыҡмай, һыпырып ҡына, ойоҡтарын кейеп ҡайтыр ине. Әйткәндәй, өйҙә лә ул бер ваҡытта ла яланғас аяҡ йөрөмәне... Иманлылыҡтың, әҙәплелектең бер сағылышы булған бит инде уларҙың был ҡылығы..."

***Ошо уҡ ауылда йәшәүсе 1954 йылғы Байрамғәлина Рәшиҙә Сабир ҡыҙының һөйләгәндәре лә фәһемле мәғлүмәт булыр гәзит уҡыусыларға:*** "Мәксүт ауылында бер инәй Ағиҙел буйында эҫе йәй көндәрендә таш менән арҡа, бил, быуындар һыҙлауын дауалай торғайны. Ул бер тигеҙ генә йәйпәк таштарҙы йыйып алып, уларҙы ҡояшта ҡыҙҙырып, һыҙлаған урындарға һамаҡлап теҙеп кенә һала ине. Был һамаҡлау, хәҙер уйлауымса, доға булған. Ҡайһы бер һүҙҙәре хәтерҙә һаҡланған. Ул һүҙҙәр Фатиха сүрәһендә бар. Инәй һыҙланыуҙы эҫе таш менән ҡыуған, доғалар менән өшкөргән. Әсәйемдең биле ауырта торғайны, уның бер нисә тапҡыр ошо дауаны ҡулланғас, аяҡҡа баҫып киткәнен иҫләйем. Иҙел буйында дауаланғанда таштарҙы ул күлмәге аша ғына һалдырыр ине. Хәҙергеләр кеүек, бар ғәм алдында ҡатын-ҡыҙ ғәүрәтен күрһәтеү ғәҙәте булманы улар заманында.

Ҡотан ауылында Камила исемле белемле генә инәй йәшәне. Быуын ултыртыу, һынған урынды сыра ярып өйсөкләп бәйләү, яман шешектәрҙе утта ҡыҙҙырған бысағы менән ярыу һәм башка бик күп дауалау ысулдарын белә ине. Бәүеле тотмаған малайҙарҙы таш менән дауаланы. Ете юл сатында өсаяҡҡа таба ултыртып, ут яға торғайны. Табала таштарҙы ҡыҙҙырып, шуның өҫтөнә шажлатып кесе ярау иттерә ине. Табанан сыҡҡан парҙы өшкөрөп, балаға табан өрә торғайны. Был дауалау ысулы ете тапҡыр ҡабатлана. Ололар: "Камила инәйҙең дауаһы килеште, малайым арыуланды", - тип ҡыуана инеләр..."

Бына шулай итеп, һүҙ артына һүҙ эйәреп, хәтер һандыҡтарын асып, таш менән дауалау төрҙәрен арыуыҡ асыҡланыҡ ағинәйҙәр менән. Аралаша торғас, атайымдың әсәһе Брәтәк ауылының кендек инәһе Маһибәҙәр ҡартинәйемдең (1880-1978) бала сағымда ике тапҡыр ҡайраҡташ ҡулланып, тимерәүҙән өшкөрөүенең килешеп китеүе иҫкә төштө. Үҙенә бер төрлө таш яныуысты һыулай биреп, балта-бысаҡ кеүек ҡорамалды үткерләгәндә, уның өҫтө бер аҙ иҙелепме, күперекләнепме китә. Бына шул шыйыҡлыҡты һөртөп, өшкөрөп дауалағайны ул мине. "Ҡайраҡ, ҡайраҡ, кит йыраҡ, кит йыраҡ!" - шешектәрҙе, бүһерҙе имләү йолаһы ла булған икән шул башҡорт ырымдарында.

Иҫке Собханғолдан Зәкиә Йәмилха ҡыҙы Суфиянова ла был теманан ситтә ҡалманы. Бала саҡта йәйге миҙгелгә күсеү менән, көҙгә тиклем яланаяҡ йөрөүебеҙ тураһында иҫләп алдыҡ уның менән. Аяҡты ватыҡ быялаға яралау, йә булмаһа тимер-фәләнгә ҡырҡылыу, ҡаҙалыу кеүек ҡаза бик һирәк осраған заман булған бит әле ул саҡтар. Йылға эсендәме, яр буйындамы - яланаяҡ таш тапау үҙе ниндәй файҙа булған беҙҙең сәләмәтлек өсөн! Аяҡ табанындағы барса нөктәләр тәнебеҙҙәге һәр ағза өсөн яуаплы икәненә хәҙер барыбыҙ ҙа мәғлүмәтле. Шуны иҫләп, 10 см тирәһе тәрәнлектәге йәшниккә эреле-ваҡлы йылға таштары тултырып, йәй көнө ишек алдына, ҡышҡа өйгә индереп ултыртып ҡуйһаҡ, яланаяҡ шулар өҫтөндә тапаныр тороуҙы ғәҙәт итеп алһаҡ ине, тигән тәҡдим индереүҙе кәрәкле тип таптыҡ. Был кәңәшебеҙ ҙә күптәргә килешер тигән ышаныста ҡалабыҙ.

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,
Бөрйән районы "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Бөгөн Силәбе һүҙенең килеп сығышы тураһында төрлө фараздар йәшәй. Уларҙың береһе затлы нәҫелдән сыҡҡанлыҡты аңлатһа, "яҙыусы", "шағир", "уҡыусы", "белеүсе", "зирәк" тигән мәғәнәләре лә бар. Һәр хәлдә, төрки сығышлы был һүҙ бөгөн Силәбе өлкәһендә йәшәгән 160 меңдән ашыу милләттәштәребеҙ хаҡында һүҙ йөрөткәндә лә исеменә есеменең тап килеп тороуына ишаралай. Сөнки башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәр араһында Силәбе - мәғариф, мәҙәниәт, сәнғәт, эшҡыуарлыҡ һ.б. тармаҡтар буйынса иң алдынғыларҙың береһе тип һис икеләнмәй әйтергә мөмкин. Быны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Силәбе өлкәһендә Мәҙәниәт һәм мәғрифәт көндәре сиктәрендә ойошторолған фекер алышыу ҡороndағы сығыштар ҙа раҫланы.**

# УЛАР ЗАТЛЫ НӘҪЕЛДӘН...

Сарала ике субъекттың башҡарма власть вәкилдәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы һәм Башҡарма комитеты ағзалары, комиссиялар кураторҙары һәм башҡа төбәктәр ҡоролтайҙары рәйестәре, Силәбе өлкәһе йәмәғәт ойошмалары етәкселәре һәм әүҙем йәмәғәтселәр ҡатнашты. Ҡоролтай Президиумы рәйесе Эльвира Айытколова белдереүенсә, был сараның төп маҡсаты булып халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты, башҡорт халҡының мәҙәни мираҫын һаҡлау тора һәм проект үҙе БР Гранты ярҙамында тормошҡа ашырыла. Әйткәндәй, проектты тормошҡа ашырыу сиктәрендә Силәбе өлкәһенең белем усаҡтары башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу, уҡытыуҙы ойоштороу буйынса тулыһынса уҡытыу-методик әсбаптар менән тәьмин ителгән. Өлкәгә башҡорт телендә 15 мең китап, йәмәғәт ойошмаларына башҡорттарҙың атрибутикаһы, дәүләт символдары, шулай уҡ "Айгөл" халыҡ бейеү ансамбленә һәм мәктәптәргә барлығы 28 пар милли костюм тапшырылған. Шулай уҡ белем биреү учреждениелары милли уйын ҡоралдары, 60 комплект Башҡорт теленең академик һүҙлеге һәм Башҡорт энциклопедияһы менән тәьмин ителгән. БР Милли китапханаһы Силәбе өлкәһе китапханаларын 400 мең һумлыҡ 1500 китап менән тулыландырған.

Фекер алышыу ҡоронда ҡатнашыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов тәбрикләп: "Силәбе өлкәһе беҙҙең өсөн күрше генә түгел, стратегик яҡтан мөһим төбәк тә. Унда Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең иң күбеһе тупланған. Силәбе өлкәһендә йәшәүсе башҡорт халҡы араһында эш алып барыу беҙҙең милли сәйәсәттең төп йүнәлештәренең береһе булып тора. Республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең милли-мәҙәни ихтыяждарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерергә тырышабыҙ. Силәбе өлкәһе хөкүмәте 19 мәктәпкәсә һәм 31 дөйөм белем биреү учреждениеһында башҡорт телен уҡытыу ойошторған. Шул уҡ ваҡытта Магнитогорск ҡалаһында 59-сы, Миәстәге 1-се, 22-се мәктәптәрҙә, Сыбаркүл районының Бишкил, Арғаяш районының Ҡыҙыл Октябрь, Сосновка районының Кременкүл ауылдары мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеүгә мохтажлыҡ бар. Ошо йәһәттән дә ярҙам булыр, тип өмөт итәбеҙ", - тип белдерҙе.

Силәбе өлкәһе губернаторы урынбаҫары Станислав Мушаров өлкәлә башҡорттарҙың Арғаяш (60 процент) һәм Ҡонашаҡ (47 процент) райондарында компактлы йәшәүен белдерҙе. "Башҡарма власть органдары башҡорттарға башҡорт телен һаҡлау, милли мәҙәниәтте үҫтереү, Рәсәй милләте берлеген нығытыуҙа ярҙам күрһәтә, - тип белдерҙе ул. - Беҙ берлектә төрлө саралар үткәрәбеҙ, әммә эшләйһе эштәребеҙ ҙә бик күп".

Артабан һүҙ хәҙерге заманда популяр булған гранттар темаһына арналды. Силәбе өлкәһе губернаторы урынбаҫары Станислав Мушаров быйыл өлкә губернаторы гранттарының дөйөм күләме 100 миллион һум булыуын һәм башҡорт ойошмаларының да унда ҡатнашыуын билдәләне. Ҡатнашыу бер, әммә грант алыу - икенсе мәсьәлә. Был хаҡта Силәбе ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Владислав Габов үҙенең фекерҙәрен түбәндәгесә еткерҙе: "Беҙ грант конкурстарында ҡатнашабыҙ һәм ике тапҡыр субсидия алыуға өлгәштек. Быйыл уҡсылар 450 мең һумлыҡ грант алды, Яңы йылдан һуң эш башларға ниәтләйәр, әммә әлегә күнекмәләр өсөн тир булмауы бәкәлгә һуға. Башҡорт йәмәғәт ойошмалары һаны артыуы, әлбиттә, ыңғай күренеш, шул уҡ ваҡытта улар грант конкурстарында әүҙемлек күрһәтмәй. Бөгөн йәмәғәтселәрҙең дәүләт менән мөнәсәбәттәренең иң һөҙөмтәле ҡоралы - гранттар икән, һәр кем үҙенең гранты хупланыуына өмөтләнә. Ләкин күптәр социаль проектлау буйынса белемгә эйә түгел. Кешенең конкурс тураһында ишетеп, белеп, уңышлы ғариза яҙып, грант алыуы, һуңынан дөрөҫ итеп отчет биреүе араһында ҙур упҡын ята. Шуға күрә Силәбе өлкәһендә йәмәғәт ойошмалары өсөн гранттар буйынса аңлатыу курстары ойоштороу мөһим".

Силәбе өлкәһендә ойошторолған тарихи-мәҙәни үҙәк белгесе Нурия Иҡсанова ике субъект араһындағы мәҙәни бәйләнештәрҙең яңы этапҡа сығыуын билдәләп, миҫалға "Йәшлек-шоу", "Һылыуҡай" конкурстарының күсмә һайлап алыу турҙары үткәрелеүен билдәләне. Шулай уҡ ул Силәбе өлкәһендә боронғо йолаларҙың һаҡланып ҡалыуын һәм уларҙы популярлаштырыу кәрәклеген белдерҙе. "Силәбе өлкәһендә боронғо башҡорт ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары бик яҡшы һаҡланған. Улар араһында сеңләү ҙа бар. Беҙҙең башҡарыусыларға бәйгеләрҙә ҡатнашыу өсөн Башҡортостанға барыуы еңелдән түгел. Арғаяш районында "Арғужа" башҡорт фольклор конкурсы, төрлө мөнәжәт бәйгеләре уҙғарыла, шулай ҙа бындай саралар өлкә кимәлендә ойошторолһа, бик тә яҡшы булыр ине", - тип белдерҙе Нурия Сәғит ҡыҙы һәм сеңләү буйынса ла конкурс ойоштороуға баҫым яһаны. Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры урынбаҫарҙары Наталья Лапшина менән Рәнис Алтынбаев был тәҡдимде хупланы.

Силәбе дәүләт университеты доценты, педагогия фәндәре кандидаты, Хафиз Ҡушаев нәҫеленән булған Людмила Черепанова уҡыусылар менән тарихи тамырҙарҙы барлау эшмәкәрлеге алып барыуын һәм күптәрҙең үҙ шәжәрәһенә ҡыҙыҡһыныу белдереүен билдәләп, уҡыусылар араһында шәжәрә конкурсы үткәреү һәм үҙенең тамырҙары менән ҡыҙыҡһыныусылар берләшмәһе ойоштороу тәҡдимен индерҙе.

Артабан фекер алышыу мәғариф темаһы буйынса дауам итте. Моғайын, Силәбе өлкәһе был йәһәттән иң алда барған төбәктәрҙең береһелер, сөнки быйыл бында 31 дөйөм белем биреү мәктәбендә башҡорт теле өйрәнелә, уҡыусыларҙың 71,8 проценты туған телен өйрәнеү хоҡуғы менән файҙалана. Шулай уҡ 8 белем биреү учреждениеһында һәм Силәбе ҡалаһының өс мәктәбендә башҡорт теле дәрестән тыш өйрәнелә (336 бала, 7 процент самаһы). Дөйөм алғанда, өлкә башҡорттарының 80 проценты самаһы туған башҡорт телен өйрәнә. Өлкәлә хатта балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре бар. Бөгөн 38 төркөмдә 803 бала туған телендә тәрбиәләнә, улар менән 30 самаһы тәрбиәсе шөғөлләнә. Был балалар киләсәктә туған тел булараҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәтен һайлаясаҡ.

Шулай уҡ бында Силәбе һәм Ҡурған өлкәһенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ассоциацияһы ойошторолған (етәксеһе - Ҡамса Мортазин). Уның төп маҡсаты булып ата-әсәләр менән эшләү өсөн барлыҡ педагогик йәмғиәтте берләштереү, үҙ-ара ярҙам күрһәтеү.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Юҡҡа ғына Рәсәй субъекттары араһында башҡорттар иң күп йәшәгән төбәк Силәбе тип аталмайҙыр, күрәһең. Уларҙың затлы нәҫелдән, "яҙыусы", "шағир", "уҡыусы", "белеүсе", "зирәк" булырға тейешлегенә Аллаһы Тәғәлә үҙе фатиха биргән. Шөкөр, Силәбеләге милләттәштәребеҙ ошо атамаһың асылын аңлап, уға тап төшөрмәй йәшәй.**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҠОЛЛОҠМО, ӘЛЛӘ АЗАТЛЫҠМЫ?

Үҙ көсөнә ныҡлы таянырға өйрәнмәйенсә, үҙендә ышаныслы шәхес итеп тәрбиәләп булмай. Күптәр, үҙенә генә иҫәп тотоусы кеше үҙен ситен, һалҡын тота, уҫал була, тип иҫәпләй. Был, ғөмүмән, ялған фекер. Үҙ көсөнә таянған кеше, бойондороҡһоҙ булараҡ, башҡаларға аңлап ҡарай, шул уҡ ваҡытта үҙен дәрәжәле, ышаныслы тоя. Ул аяғында ныҡлы баҫып тора һәм уға мутлашыу кәрәкмәй ҙә.

Үҙ-үҙенә ышанмауҙың төп сәбәбе - башҡалар аҡыллыраҡ, тапҡырыраҡ, күберәк белә, тип инаныу. Бәхет, именлек эҙләп, ул ҡарашын башҡаларға төбәй.

Бындай бойондороҡлолоҡҡа тарыған кеше һәр ваҡыт үҙ донъяһынан тыш нимәгәлер тартыласаҡ. Ул үҙе өсөн үҙе эшләргә тейеш нәмәне ниндәйҙер шарттар йәки Алла эшләүен теләй. Был уны үҙ фекере булмаған, һәр нәмә менән килешеүсән әҙәмгә әүерелдерә.

## Үҙ көсөңә ышанырға өйрәнеү

Үҙ көсөңә таяныу гәҙәте - ул эштәреңдә уңышлы алып барыу һәм байлыҡҡа өлгәшеү ысулы ғына түгел. Был һин ысынлап мохтаж булған уңышҡа ишара яһауы эске тауышҡа ҡолаҡ һала белеү. Бындай ғәҙәт шәхесеңде үҫтереү маҡсатында башҡаларҙы тыңлау түгел, ә үҙ фекереңә таяныуҙы белдерә.

Был билдәләрҙе дөрөҫ уҡырға һәм һәләтебеҙ, темпераментыбыҙға тап килгән йәшәү рәүешенә өйрәнһәк, беҙ уңышлы, бәхетле буласаҡбыҙ. Беҙ көслөбөҙ һәм үҙ-үҙебеҙ булып ҡалабыҙ.

## Буйһоноуға күнегеүҙе боҙоу

Бойондороҡлолоҡ - ул үҙ-ара килешеү буйынса ҡоллоҡҡа төшөү. Ул буйһонған кеше өсөн дә, буйһондороусы өсөн дә емергес булып тора. Иң насары - ҡолдарса фекер йөрөтөү. Башҡаларға аҫтан өҫкә ҡарау - ул бойондороҡлолоҡ билдәһе. Үҙеңде башҡа берәү менән сағыштырып та һин психологик ҡоллоҡҡа эләгәһең.

Табыныу һәм бойондороҡлолоҡ ҡайһы бер кешеләр аңына шул тиклем ныҡ һеңә, улар хатта башҡа кеше файҙаһына шәхси абруйынан да баш тарта. Көсө һәм белеме үҙенекенән өстөн булған кешене йәки ойошманы тапҡан хәлдә генә улар үҙҙәрен хәүефһеҙ тоя. Үҙ гүмерҙәрен ошондай кешегә йәки ойошмаға хеҙмәт итеүгә арнап, кешеләр үҙ бәхете өсөн яуаплылыҡты сит ҡулдарға тапшыра. Әлбиттә, был өҫтәмә уңайлылыҡ та тыуҙыра: уңышһыҙлығында башҡаларҙы ғәйепләү мөмкинлеге.

Башҡаларҙы үҙенән аҡыллы тип иҫәпләгәндәр һәр ваҡыт башҡаларҙа терәк эҙләй. Бойондороҡлолоҡ хәлендә ҡалып, ул сит кеше кәңәшен мотлаҡ үтәргә кәрәк тип ҡабул итә. "Кәңәшселәр" бер нисәү булып китһә, ҡайһыһын тыңларға белмәй, ул арып, йонсоп китә.

Кәңәштәр, бик күп булыуы мөмкин. Ләкин һәр кемдең үҙ проблемаһы бит, һәм улар һинең нимә "булдыра алғаныңды", "теләгәнеңде" йәки "тейешлегеңде" белмәй, шуға күрә кәңәштәр лә дөрөҫ булмаясаҡ. "Кәңәшсе-тәрбиәсе" ролендә ярамаған кешене тыңлау слесарға теш яматырға барыу менән бер.

Бойондороҡлолоҡто еңеү бик еңел түгел, әлбиттә. Бала саҡтан беҙҙе уңышҡа өлгәшеү өсөн башҡаларҙан өлгө алырға, дөрөҫ юлдан барырға һәм белемгә эйә булырға өйрәттеләр. Бойондороҡлолоҡ тәрбиәлә һәм белем алыуҙа мөһим роль уйнаһа ла, ул бер ваҡытта ла кешелек шәхесен боҙа алмай. Беҙҙең һәр беребеҙ тормошта осраған һәр ҡайһы ҡыйынлыҡты хәл итергә һәләтле булып тыуғанбыҙ.

Шуны бел: үҙ көсөнә ышанған кеше таянырҙай хужа эҙләүгә мохтаж түгел. Үҙ көсөңә ышанһаң, килеп тыуған проблеманан ситләшмә, ҡасырға тырышма. Ситтән рухланыу эҙләмә, сөнки уй-теләктәр һинең күңелеңдә. Эске Көсөң алдында тыуған һәр проблеманы еңәсәгеңә ышанып атла тормош юлынан.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 21 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.20 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Скажи что-нибудь хорошее". [16+]
22.35 Вечерний Ургант. [16+]
23.15 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
0.20 Познер. [16+]
2.55, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]

### БСТ

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00, 4.30 Күстәнәс. [12+]**
**23.30, 5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Тариф на спасение". [0+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 22 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Скажи что-нибудь хорошее". [16+]
22.35 Вечерний Ургант. [16+]
23.15 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
0.20 На ночь глядя. [16+]
2.50, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо Мн" (Минск). КХЛ.**
**22.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**23.15 Д/ф "Сердце". [12+]**
**0.15 Х/ф "1210". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 23 ДЕКАБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Скажи что-нибудь хорошее". [16+]
22.35 Вечерний Ургант. [16+]
23.15 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
0.20 На ночь глядя. [16+]
2.50, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Д/ф "По старинным улочкам Уфы". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Пофутболим?! К 10-летию ФК "Уфа". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Последняя охота". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Эх, друг Байтимер..." [12+]**
**4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.45 Д/ф "Сердце". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 24 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.20 Время покажет. [16+]
14.15 "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Скажи что-нибудь хорошее". [16+]
22.35 Вечерний Ургант. [16+]
23.15 Премьера сезона. "Док-ток".[16+]
0.20 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Мужчины. Короткая программа. [0+]
1.30 На ночь глядя. [16+]
2.25, 3.05 Наедине со всеми. [16+]
4.00 Хоккей. Сборная России - сборная Канады. Прямой эфир из Канады. В перерыве - Новости.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.)**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Замандаш". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.50 Хоккей КХЛ. "Автомобилист" (Екатеринбург) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Я сражаюсь с великанами". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**
**5.00 Спортивная история. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 25 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.30, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 3.15 Модный приговор. [6+]
12.20 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Мужчины. Короткая программа. [0+]
16.25, 4.45 Мужское / Женское. [16+]
17.20 Вечерние новости (с субтитрами).
18.00 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Мужчины. Произвольная программа. Танцы. Произвольная программа. [0+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Женщины. Короткая программа. [0+]
22.30 Вечерний Ургант. [16+]
23.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
1.35 Д/ф Премьера. "Мистификация: Майкл Хатченс". [16+]
4.05 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир".
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 Х/ф "Чужое лицо". [12+]
1.35 Х/ф "Школа для толстушек". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.)**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Моя планета Башкортостан.[12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Д/ф "Сосланбек Тавасиев". [12+]**
**20.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00, 5.30 Караоке по-башкирски.[12+]**
**23.30, 3.00 Автограф. [12+]**
**0.00, 3.30 Х/ф "Профессионал". [18+]**
**2.15 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**6.00 "Бай". [12+]**

## 26 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
7.30 Хоккей. Сборная России - сборная США. Молодежный чемпионат мира-2021. Прямой эфир из Канады.
10.00 Умницы и умники. [12+]
10.45 Слово пастыря. [0+]
11.00 Новости.
11.15 Д/ф Премьера. "Джентльмены удачи". Все оттенки Серого". [12+]
12.15, 13.20 Видели видео? [6+]
13.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.10 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Женщины. Короткая программа. [0+]
16.10 Премьера. Праздничный концерт. К 100-летию ГОЭЛРО. [12+]
17.45 "Ледниковый период". Новый сезон. Финал. [0+]
21.00 Время.
21.20 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.10 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию. Женщины. Пары. Произвольная программа. [0+]
2.15 Модный приговор. [6+]
3.05 Давай поженимся! [16+]
3.45 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.30 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
12.30 "Доктор Мясников". [12+]
13.40 Х/ф "Обратная сторона любви". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Бывшие". [12+]
1.00 Х/ф "Родные пенаты". [12+]
4.09 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.00 "Дети детям". Всероссийский открытый фестиваль-конкурс искусств. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Хазина о хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**18.30 Йәшлек-шоу-2020. [12+]**
**20.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**21.00 Пофутболим?! К 10-летию ФК "Уфа". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 Концерт БГТОиБ, посвященный 125-летию со дня рождения Газиза Альмухаметова. [12+]**
**0.45 Х/ф "Титан". [16+]**
**3.15 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 27 ДЕКАБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.15, 6.10 Х/ф "Старики-разбойники". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Д/ф "Рецепт ее счастья". К 95-летию Ольги Аросевой. [12+]
14.55 Х/ф "Экипаж". [12+]
17.15 Премьера. Праздничный концерт к Дню спасателя. [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
23.10 "Горячий лед".Чемпионат России по фигурному катанию. Новогодние показательные выступления. [0+]
1.30 Х/ф "Лукас". [18+]
3.05 Наедине со всеми. [16+]
3.50 Модный приговор. [6+]

### РОССИЯ 1

4.15, 1.30 Х/ф "Королева льда". [12+]
6.00, 3.15 Х/ф "Северное сияние". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.15 "Аншлаг и Компания". [16+]
13.20 Х/ф "Критический возраст".[12+]
17.25 "Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица". Финал.
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**10.15 "Гора новостей". [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 Территория женского счастья.**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [0+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**17.45, 4.15 Посмотрим... [6+]**
**18.30 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**18.45 "Лидеры региона". [12+]**
**19.15 Презентационный фильм БАШГАУ. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж.[12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Белоснежка". [12+]**
**2.00 Спектакль "Морозное дыхание метели". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (6) дүшәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 22 (7) шишәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 23 (8) шаршамбы | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 24 (9) кесе йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 25 (10) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 26 (11) шәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 27 (12) йәкшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Баш ҡалалағы Башҡорт теле көнө айҡанлы уҙғарылған бихисап күркәм сараларҙың береһен Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы ойоштороҙо. Уларҙың Бауырһаҡ байрамы белем һәм тәрбиә бер миҙалдың ике яғы булыуын сағылдырҙы. Сарала Мәғариф министрлығының бүлек мөдире Илдус Ҡаһарманов, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова, Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүсеһе Эльвира Муллағолова, тәжрибә уртаҡлашыусы аш-һыу оҫталары ҡатнашты.**



# МИЛЛИ АШТАР БЕШЕРЕП...

## башҡорт телен өйрәнәләр

Колледжда Бауырһаҡ байрамы уҙғарыла тигәс, кемдәрҙер ярышамы, нисегерәк ойошторолор икән, тип түҙемһеҙләнеп барҙыҡ уҡыу йортона. Бәхетебеҙгә, ул колледждың иркен аш-һыу бүлмәһендә оҫталыҡ дәресе рәүешендә уҙғарыла икән. Бында футболгер Зөбәржәт Утарбаева, Стәрлетамаҡтан "Общепит" акционерҙар йәмғиәтенең производство мөдире Гөлшат Әбүталипова һәм уның уҡыусыһы Әлфинур Абдуллина, колледж уҡытыусыһы Гөлназ Ширяева башҡорт халҡының һәр табында түргә ҡуйылған яратҡан ҡамыр ашын әҙерләү серҙәрен асты.

- Бауырһаҡ - бик талымлы тәмлекәс. Уны әҙерләгәндә С0 категориялы йомортҡа, он һәм көнбағыш майының да юғары сифатлылары кәрәк. Ондо 2-3 тапҡыр иләргә онотмағыҙ. Алюмин һауытта майҙы ҡыҙҙырғанда ла иттибарлы булыу мөһим: бауырһаҡ үтә ҡайнарҙы ла, ҡыҙып етмәгәнде лә яратмай. Ул яй ғына майҙа ҡалҡырға тейеш, май эсе булһа көйә, йә үтә ҡабарып ярыла, - ти оҫта хужабикә Зөбәржәт Утарбаева. - Үҙем дә күптән түгел Гөлназ Мәүлихановнанан өйрәнеп алдым, оҫталыҡ дәресенә саҡырыу алғас, тулҡынланып килдем. Был үҙебеҙҙең милли аш-һыуҙар аша йәштәрҙең күңелдәрен үҫтереү йәһәтенән дә, һатып алынған тәмлекәстәр урынына үҙ ҡулдары менән эшләп алырға өйрәтеү яғынан да әһәмиәтле сара булды. Әле студенттар менән бик тиҙ арала уртаҡ тел таптыҡ, барыһы ла башҡортса аңлатыуымды ла төшөндө.

Бауырһаҡтан тыш, оҫталыҡ дәресе ваҡытында урама, ҡош теле, сәк-сәк кеүек башҡорт халҡының сәй табындарына ҡуйыла торған баллы-шәкәрле тәмлекәстәр ҙә әҙерләнде. Аш-һыу оҫталарының ҡул араһына инеп, әүҙем йүгереп йөрөгән студенттар Альбина Хәкимова һәм Милана Лукьянова бер тауыштан был дәрестең үҙҙәре өсөн айырыуса файҙалы һәм әһәмиәтле булыуын бәйән итте. Ҡыҙҙар технолог һөнәрен үҙләштерә икән һәм бөләкәйҙән бешеренергә яраталар.

Бына шулай тантаналы ла, файҙалы һәм фәһемле лә булды Өфө сауҙа-иҡтисад колледжының Бауырһаҡ байрамы. Уҡыу йортоноң директоры Ришат Сабитов әйтеүенсә, киләсәктә бындай тәжрибә майҙансыҡтары айына бер тапҡыр даими ойоштороласаҡ. Был артабан яйлап ҙур бер проектҡа әүерелеп, Башҡортостанда гастрономия туризмын үҫтереүгә лә булышлыҡ итер, тип маҡсат итә уҡыу йорто. "Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы тиҙҙән 50 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәк, оло быуын кешеләре беҙҙең уҡыу йортон Өфө совет сауҙа техникумы тип белә. Бөгөн беҙҙә 1470 бала уҡый, улар республиканың төрлө төбәктәренән йыйылған һәм баш ҡалабыҙҙан да күптәр. Башҡорт теле көнө айҡанлы уҙғарырға теләгән саралар араһында был Бауырһаҡ байрамы студенттарыбыҙ күңеленә айырыуса хуш килер, тип уйланыҡ, - ти Ришат Хажиғәли улы. - Сөнки беҙҙә йәмәғәт туҡланыуы технологы, кондитер, ашнаҡсы һөнәрҙәрен үҙләштереүселәр байтаҡ һәм уларға ошондай аш-һыуға арналған саралар яҡын. Бынан тыш, барыбыҙ ҙа яҡшы аңлайбыҙ, бөгөн башҡорт телен талап итеп кенә уҡытып булмай һәм балаларҙың теңкәһенә теймәй генә телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу мөһим. Бына ошо маҡсатта Бауырһаҡ байрамы кеүек саралар балаларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә дәртләндерергә ярҙам итә. Башҡорт халҡының милли аш-һыуҙары, мәҙәниәте аша халҡыбыҙға һәм телебеҙгә ҡарата иттибарлы, ихтирамлы ҡараш тәрбиәләйбеҙ".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бауырһаҡ бешереү буйынса оҫталыҡ дәресенән тыш, был уҡыу йылы дауамында башҡорт теле буйынса олимпиада, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, төрлө конкурстарҙа әүҙем ҡатнашып, алдынғылыҡты бирмәгән уҡыусылар Башҡорт теле көнө айҡанлы башҡорт дәүләт телен үҫтереү, башҡорт халҡының йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлауға өлөш индергәне һәм сараларҙа әүҙем ҡатнашҡаны өсөн рәхмәт хаттары, "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы китабы менән бүләкләнде. Ә инде был йәһәттән барлыҡ тиҫтерҙәренә өлгө күрһәткән алдынғылар - Алһыу Насырова, Вилнур Тулыбаев, Азалия Мәсәғутова, Назгөл Уразбаева һәм Наҙгөл Мөхәмәтовага колледж етәкселеге "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу һәм редакциябыҙҙан иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы. Талантлы студенттар Динислам Ишмурзин, Әдилә Хәйретдинова һәм Наҙгөл Нөғәмәтованың ижади сығыштары менән аралашып барған тантананан һуң, Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы менән Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү ҙә төҙөлдө.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 декабрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+
**23 декабрь "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+
**27 декабрь "Һөйәркә"** (Т. Миннуллин), драма. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 декабрь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 17.00 0+
**25 декабрь "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.30, 14.00, 16.30 0+
**26 декабрь "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.30, 14.00, 16.30 0+
**"Щелкунчик"** (Н. Соболева) әкиәт. 12.00, 15.00, 18.00 0+
**27 декабрь "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.30, 14.00, 16.30 0+
**"Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00, 15.00, 18.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 декабрь "Етем төлкө"** (О. Штырляева). 11.00 0+
**26-27 декабрь "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 11.00, 14.00, 17.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 декабрь** Т. Рамазанов етәкселегендәге эстрада төркөмөнөң онлайн концерты. 6+
**20-30 декабрь "Главный новогодний утренник Уфы"**, тамаша. Башлана: эш көндәрендә сәғәт 19.00, ялдарҙа - 11.00, 14.00, 17.00 0+

КҮҢЕЛЛЕ МӘШӘҠӘТТӘР

# ЯҢЫ ЙЫЛ ТАБЫНЫНА

**Аллаға шөкөр, иҫке йылды оҙатырға, яңы йылға аяҡ баҫырға йыйынабыҙ. Яңы ғына көҙгө байлыҡты йыйып, ҡош-корттарҙы һуйып, баҙҙарҙы, тундырғыстарҙы шыплап тултырғайныҡ, шунан инде һуғымлыҡ үгеҙ-таналар, тай-тулаҡтарҙың сираты етте.**

Яратып, матурлап ашатып үҫтергән малыңды, имеш, сал да ҡыш буйы ризыҡ итеп аша инде, эйеме? Ни эшләйһең, ата-баба йолаһы... Элек-электән килгән матур йола.

"Ҡыш бауыры оҙооон", - тип һуҙыр ине ҡәрсәйем. Хәҙер уның һуҙҙәрен үҙем дә һиҙмәҫтән бик йыш ҡабатлайым. Сөнки бөтөн булған ризыҡты бүлеү, самалау, исрафламай тотоноу ҡатын-ҡыҙ ҡулында.

Декабрь - ул йылға йомғаҡ яһау айы. Эш буйынса ғына тиһегеҙме, юҡ шул, йорт-ҡураңдың, өйөңдөң, келәт-баҙҙарыңдың тәҙәкләгән теүәлләп, нығытып ҡышҡа аяҡ баҫыуҙы талап иткән ай ул - декабрь.

Утын-бесән ҡырҙан ҡайтарылып бөткәнме, ҡыш буйына етерлекме, барыһын да хәстәрләй егәрле хужа кеше. Ә беҙ, хужабикәләр, ҡаты һыуыҡтар төшкәнсе бейәләй-нәскиҙәрҙе рәтләйбеҙ. Бәйләрен бәйләп, ямарын ямап та ҡуябыҙ әле.

Ноябрь, декабрь буйы ауылдарҙа гөрләп ҡаҙ өмәләре үтте, туғандар, күршеләр йыйылып һуғым һуйҙылар... Бер нәмәгә ҡарамай, тормош дауам итә...

Ошо көндәрҙә ҡыҙым: "Әсәй, ә беҙ Яңы йыл өҫтәленә нимә әҙерләйбеҙ?"- тип һорап ҡуйҙы. "Әле ваҡыт бар, иртә әле уны ҡайғыртырға", тип ҡотолмаҡсы булғайным да, ҡыҙымдың ҡабатлап һорауына мин дә уйлана ҡуйҙым...

Тәәк, киләһе йыл Һыйыр (Үгеҙ) йылы була икән. Ҡайҙалыр уҡыныммы, берәйһе әйттеме, был йылды ҡаршылағанда табында һыйыр ите булырға тейеш түгел! Былай ҙа үсегеп, һөҙөшөргә торған Һыйыр (Үгеҙ) үсегә, имеш. Аҙаҡ йыл буйына һиңә үпкә тотоп, эштәреңә аяҡ саласаҡ, мөгөҙө менән һелтәп осорасаҡ, имеш. Ҡош-ҡорт ите, йәшелсә, диңгеҙ аҙыҡ -түлеге, балыҡ ризыҡтарына өҫтөнлөк бирергә кәрәк икән киләһе йылда...

Ҡыҙым менән шулай ҙа ризыҡтар теҙмәһен бер блокнотҡа теркәп ҡуйҙыҡ: быҡтырылған ҡаҙ; төрлө салаттар; йәшелсә-емештәр; һут, компоттар...

Ҡаҙҙы кем нисек бешерәләр, беҙҙәнсә ул еңел генә әҙерләнә. Ҡаҙҙы туңдырғыстан алып, яйлап ҡына иретәм. Ҡапыл ныҡ йылы ергә ҡуймайым. Әйтәйек, иҙәнгә табаҡ эсенә ҡуйып, өҫтөн ябып торам.

Тулыһынса иреп бөткәс, бер ҡалаҡтай тоҙҙо бөтөн тәненә тигеҙ бүлеп ышҡып сығам. Бер лимон һутын тәрилкәгә һалып, өс тырнаҡ һарымһаҡ, 1-2 ҡалаҡтай ғына майонезды бутап, ошо ҡатышманы ҡаҙға матурлап һөртәм. Ике стакан дөгө ярмаһын оҙаҡ итеп сайып алам, аҙаҡ 10-15 минут тоҙло һыуға һалып, еңелсә ҡайнатып алам. Һеҙгәс аша һыуын һарҡытып, һалҡын һыуҙа сайҙырам. Аҙаҡ иң яуаплы мәл етә - ул ҡаҙ тултырыу. Иң беренсе дөгө, аҙаҡ ҡара емеш, йәшел алма, күрәгә һәм башҡа емеш тултырырға мөмкин. Ҡаҙҙың эсе сикһеҙ түгел, шуның өсөн һәр береһен самалап ҡына һалып, ҡалын еп менән тегеп ҡуйырға ғына ҡала. Шунан ҡаҙҙы фольга-ҡурғашҡа урап, ике сәғәткә 180-200 градуслы духовкаға оҙатам. Ҡалын түшле, ҙур ҡаҙҙар оҙағыраҡ та бешә. Аҙаҡ бешкән ҡаҙ эсендәге ризыҡтарҙы иплән кенә ҙур тәрилкәгә алып, ит менән өлөшләп, өҫтәлгә бирәбеҙ. Бешереп ҡарағыҙ үҙегеҙ. Уның тәмен яҙып ҡына аңлатып булмай, тел йоторлоҡ була был ризыҡ!

Июнь аҙағында ғына алһаҡ та, ҡаҙ бәпкәләрен иҫән-һау теүәл үҫтереп, 4-4,5 килоға еткерҙек. Йылға буйында йәй буйы тамыр-томор ашап, витаминлы үләндәр араһында үҫкәнгә шулай бәрәкәтле булғандарҙыр, тибеҙ инде...

Өҫтәлдең йәме - татлы һәм итле бәлештәрем дә буласаҡ Яңы йыл табынында. Тауыҡ ите менән ҙур һәм бәләкәй бәлештәр бешерергә лә уй бар. Киләһе йылдың хужаһы муллыҡты ярата икән, тимәк, ҡулдан килгәнсә бешереп-төшерәрбеҙ инде.

...Ә бөгөн мин йыйылған ҡатыҡымдан быйылғы йылдың һуңғы ҡоротон ҡайнаттым. Иҫке теген машинамды рәтләп, яңы ҡорот тоғо тектем...

Алла бирһә, һаукәшем, танаҡайым быҙаулар ваҡыт етер.

Быҙауҙары берәр айлыҡ булғас, улар имгәндән ҡалған һөттән ҡатыҡ эшләрмен. Һуңғары уныһын йыйып, ҡоротон ҡайнатырмын...

Бына шундай яҡты хыялдар менән Яңы йылға ла аяҡ баҫырбыҙ.

Һәр көн - ул беҙгә Хоҙайҙың бүләге. Рәхмәт әйтә, шатлана, ҡыуана белергә кәрәк! Яңы йылыбыҙ тик шатлыҡ-ҡыуаныстар ғына килтерһен, ҡурҡыныс ауырыу-сырхауҙар урап үтһен, еребеҙгә изгелек, иман нурҙары таралһын, барлыҡ кешелек бәхетле тормошта, мөхәббәтле донъяларында һөйөп-һөйөлөп кенә йәшәһендәр. Амин!

**Айгөл МИҢЛЕБАЕВА.**
**Күгәрсен районы.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ҮҘ ТЕЛЕМӘ МӘҘХИӘ!



**Телдең матурлығы, илаһилығы йыр аша һәр кешенең күңеленә үтеп инә. Юҡҡамы ни әсәйҙәребеҙ беҙҙе сабый саҡта бишек йыры йырлап йоҡлатҡан, өләсәй-олатайҙарыбыҙ төрлө һамаҡтар менән яраткан... Туған тел - ул халыҡтың тере күңеле, һөйләп торған шатлығы, ҡайғыһы, һүҙ хәтере, бөтмәҫ-төкәнмәҫ рух байлығы. Туған теле барҙың - туған рухы бар.**

Башҡорт теле көнө уңайынан Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үткән матур концерт рухи балҡышы менән хәтерҙә ҡалды. Сәхнәнән әйтелгән һәр һүҙ, яңғыраған һәр йыр, хатта музыканттарҙың һәр нотаһы ошо һалҡын көндә рухи аҙыҡ алырға теләп килгән тамашасының күңеленә үтеп инде. Концерттан һуң уларҙың бер ни тиклем таралышмай, афишалар ҡуйылған стенд эргәһендә фекер алышып, киләһе концерттарға килергә пландар төҙөп тороуы - һүҙҙәремдең хаҡлығын раҫлай. "Сәләм, дуҫ!" тип исемләнгән тамашаның сценарийы Миләүшә Ҡаһарманованыҡы, ул шул тиклем ябай ҙа, күңелгә ятышлы ла, һәр кем өсөн аңлайышлы ла булды. Бында һәр нәмә теүәл уйланып, еренә еткереп башҡарылған. Концерттың режиссеры Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәмизә Мөхәмәтшина, йырсылар, музыканттар һәм бейеүселәргә ошо яҙылған сценарийға сағыу төҫтәр индергән.

Концерттың Рәми Ғарипов һүҙҙәренә Илшат Яхин ижад иткән "Туған тел" йыры менән башланыуы башта уҡ тамашаға ниндәйҙер бер илаһилыҡ, тылсымлылыҡ, рух бирҙе. Халыҡ музыка ҡоралдары оркестры музыканттары тәүге нотаны алыу менән, солистарҙың тәүге һүҙе менән тәндәр сымбырлап китте. Бар кешегә таныш һүҙҙәр был юлы бөтөнләй башҡаса яңғырап, күңелдең иң төпкөл урындарына инеп, күҙ йәштәре аша бәреп сыҡты. Был йыр халыҡҡа оран да, ниндәйҙер доға ла булып яңғыраны.

Концерттың тәүге бүлеге тулыһынса оркестр биҙәлешендә барҙы. Башҡортостандың халыҡ артисы Әлфиә Юлсурина, республикабыҙҙың атҡаҙанған артистары Сәйҙә Ильясова, Лилиә Ишемйәрова, Зәһир Иҫәнсурин, Дияна Ишниязова, халыҡ ара-конкурстар лауреаттары Рөстәм Шаһыбалов, Сабина Кучаева, Тимур Рамаҙанов, Рәфис Сирусин, Рифат Шәрәфетдинов, Искәндәр Ғәзизов башҡарған йырҙарҙың барыһы ла тамашаса күңеленә хуш килде. Уларҙың һәр ҡайһыһын алҡыштарға күмделәр. Ә был инде үҙ сиратында Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестрының һәм филармония солистарының һөнәри кимәле юғары булыуын билдәләне.

Алып барыусылар Зилиә Сафиуллина менән Зөлфир Басиров тамашасылар менән бергә башҡорт телендәге иң мөһим бер нисә генә һүҙгә туҡталып китте. Һәм һүҙҙәрҙең ниндәйҙәре! Әсәй, мөхәббәт, бала, ҡояш, тыуған ил... Минә ҡалһа, тап ошо һүҙҙәр бар булмышлыбыҙҙы билдәләй. Филармония артистарының ошо темаларға йырҙар башҡарыуы тап ошо һүҙҙәрҙең матурлығын, илаһилығын тағы ла бер ҡат иҫбатланы. Ғөмүмән концертта яңғыраған бер йыр ҙа артыҡ, йә иһә темаға тап килмәне, тип әйтеп булмай. Һәр ҡайһыһы урынлы. Әйткәндәй, ҡисәлә ҡурай моңо йыш яңғыраны. Талантлы музыканттар Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Азат Биксурин менән Рушан Биктимеров был тылсымлы уйын ҡоралының башҡорт халҡының бөтмәҫ хазинаһы, юйылмаҫ хәтере, мәңгелек намыҫы икәнен моң аша еткерҙе.

Концертта тағы ла шуға иғтибар иттем. Башҡорт теленең матурлығы беҙҙең бейеү сәнғәтендә лә һеңгән. Филармония бейеүселәре һәм "Салауат" балалар бейеү академияһы (етәкселәре Маргарита һәм Рөстәм Ғәндәлиповтар) тәрбиәләнеүселәре үҙҙәренең нәзәкәтле хәрәкәттәре менән, әйтерһең дә, халыҡҡа хикәйә, шиғыр, хатта роман һөйләне.

Билдәле ғалим Ғайса Хөсәйеновтың: "Туған тел - ул ата-әсәң теле, донъяла тәү ишеткән һүҙең, асылған телең, рухи моңоң" тигән һүҙҙәре бар. Башҡорт дәүләт филармонияһында үткән тамаша һәр милләт өсөн дә үҙ туған теленең ниндәй ҡәҙерле булыуын күрһәтте. "Ниндәй бәхет үҙ телеңдә рәхәтләнеп сәләм биреү! "Сәләм, дуҫ!" тип өндәшеү. Үҙ телеңдә һөйгәненә мөхәббәтеңде аңлатыу, балаңа бишек йырын йырлау... Ошонан да зурыраҡ бәхет бармы икән! Һәр милләт вәкиле ошоно аңлап үҙ туған теленә һаҡсыл ҡараштә булһын ине", - тигән теләктәрен белдерҙе тамашаның алып барыусыһы Зөлфир Басиров.

Телен һөйгән илен һөйөр, тигән әйтемде иҫтә тотоп, филармония ижади коллективы концертты Башҡортостандың халыҡ артисы Артур Туктағолов етәкселегендәге "Далан" эстрада төркөмө башҡарыуында тыуған илебеҙ, Башҡортостаныбыҙ хаҡында йырҙар менән тамамланы.

Тел, ил, халыҡ яҙмышына битараф кеше сәхнәгә сығып һүҙ йөрөтә алмай. Телде һаҡлап ҡалыуҙа, йәғни илде һаҡлап ҡалыуҙа иң яуаплы бурыс - тап улар иңендә. Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында телдең ҡәҙерен, бәҫен, матурлығын белгән егеттәр һәм ҡыҙҙар ижад итә. Бөгөн улар сәскән изге орлоҡтар киләсәктә шытып сығып, емештәрен бирерәнә иманым камил.

**Ирҡә ӨМӨТБАЕВА.**

*АФАРИН!*

# ЕГЕТТӘР СЫҠТЫ БӘЙГЕГӘ

**Халыҡ кәсептәрен пропагандалауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән "7 егет" реалити-шоуы 2019 йылда Башҡортостан юлдаш телевидениеһында һәм Ҡурай-ТВ каналында башланғайны. Проект тамашасыларҙа ла, йәмәғәт эшмәкәрҙәрендә лә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.**



2020 йылда "7 егет" реалити-шоуының икенсе миҙгеле старт алды, уның геройҙары ике аҙна эсендә халыҡ кәсептәренең 13 төрөн үҙләштерҙе, улар араһында - быйма баҫыу, арҡан ишеү, музыка ҡоралдары эшләү. Ҡатнашыусылар баһалап бөткөһөҙ тәжрибә туплауҙан тыш, бик күп тамашасыларҙың йөрәген яулап өлгөрҙө.

Башҡортостан юлдаш телевидениеһында барған "7 егет" проектының финалы - "Егеттәр балы" Яңы йыл төнөндә Башҡортостан юлдаш телеканалында күрһәтеләсәк. Тамашасыларҙы проект геройҙары, шулай уҡ егеттәрҙе төрлө һөнәргә өйрәткән оҫталар, эстрада йондоҙҙары, республиканың билдәле йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнашлығында шоу-программа көтә. Реалити-шоу еңеүсеһе башҡорт тоҡомло ат менән бүләкләнә. Уның исеме бал ваҡытында билдәле була. Ойоштороусыларҙың махсус наградаһы - тамашасылар һөйөүе призы ла бар. Каналдың рәсми сәхифәһендә һәр кем үҙенә оҡшаған ҡатнашыусы өсөн тауыш бирергә мөмкин. Реалити-шоуҙың иң күп тауыш йыйған геройы "Тамашасылар һөйөүе призы" номинацияһында еңеүсе тип иғлан ителә. "Егеттәр балы"н алып барыусылар - Лилиә Сирбаева һәм Ильяс Ҡарабулатов.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КИРЕ ИНЕР ИШЕГЕНДЕ...

## ҡаты япма

Икмәк юғы ямандыр - ҡаты-ҡото кимертә, ҡатын юғы ямандыр - ҡарт әбейҙе һөйҙәртә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кем дә кем бәләкәй генә алдаҡты оҙаҡ ваҡыт йәшәтә ала, шул иң яҡшы алдаҡсы була.

**(Сэмюэл Батлер).**

Дөрөҫ һүҙгә үпкәләргә ярамай, уның үҙенә лә шул уҡ дөрөҫлөк менән яуап бирергә кәрәк.

**(Данил Рудый).**

Тәртип булдырырға маташыусы барыһынан бигерәк тәртипһеҙлек тыуҙыра.

**(Тадеуш Котарбиньский).**

Барлыҡ тоғро ҡатындар ҙа бер төрлө. Улар бары тик үҙ тоғрололоғо тураһында ғына уйлай, ә ирҙәренең тоғрололоғо хаҡында иҫкә лә алмай.

**(Жан Жироду).**

Беҙгә дуҫлыҡ һәм изгелек етмәй, тибеҙ, бәхтиһән, дуҫлыҡҡа һәм изгелеккә беҙ етмәйбеҙ икән.

**(Марсель Жуандо).**

Икәү ярашһа, өсөнсө төп башына ултырып ҡала.

**(Кароль Ижиковский).**

Өлкән кешеләрҙең кәңәше ҡышҡы ҡояш кеүек: яҡтырта, әммә йылытмай.

**(Люк де Вовенарг).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡатын иренең өйөнә йыш һәм күп ҡунаҡ алып ҡайтыуына зарланып, Мөхәммәт бәйғәмбәргә мөрәжәғәт иткән. Аллаһ илсеһе бер нәмә лә әйтмәгән, әммә бер аҙҙан уларға ҡунаҡҡа барасағын иҫкәрткән.**

**Ҡатын да, ир ҙә бик ҡыуанған. Мул табын әҙерләп, Бәйғәмбәрҙе бик йылы ҡаршы алалар. Бәйғәмбәр бер аҙ ултыра ла, ҡунаҡсыллыҡтары өсөн рәхмәт әйтеп, ҡайтырға йыйына башлай. Шунан хужабикәгә мөрәжәғәт итеп: "Мин өйҙән сыҡҡан ваҡытта ишек тупһаһына иғтибар ит, ни күрерһең икән?" - ти. Ҡатын шулай эшләй ҙә һәм Бәйғәмбәрҙең артынан ҡуңыҙҙар, таракандар, ҡорттар һәм башҡа береһенән-береһе ҡурҡыныс һәм имәнес бөжәктәр сыҡҡанын күреп, һуштан яҙыу дәрәжәһенә етә. Шул ваҡыт Бәйғәмбәр артына әйләнә лә:**

**"Бына шулай... Килгән һәр ҡунаҡ артынан өйҙәге бөтә насарлыҡ китә. Шуға күрә, йортоғоҙға ингән һәр кешене яҡшы итеп ҡаршы алырға, хөрмәт күрһәтергә кәрәк. Аллаһы Тәғәлә ҡунаҡсыл йортто һәм уларҙың хужаларын ярата. Ишеге асыҡ йортҡа Ул һәр ваҡыт именлек, бәрәкәт һәм байлыҡ ебәрә", - ти".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир 253-25-44**
**Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24**
**Матбуғат таратыу 246-03-23**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
18 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 1029/12

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.